ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Кискe Өфө

30-5 август - сентябрь (урағай - һарысай) 2024

№34 (1127)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:


**Өфө бейек тауҙарҙа**



6

**Өфө-II ҡаласығына - 1500 йыл**

Быны донъя тарихы ла таный



8-9

**"Өф" итеп кенә йәшәтәйек әле...**

бай тарихлы баш йортобоҙҙо!



10-11

**Беҙ - Өфө буранбайҙары**



12-13


@KISKEUFA

Беҙҙең Телеграм каналға рәхим итегеҙ!

смартфон камераһын төбә

## *Баш йортобоҙ Өфөбеҙҙең 450 йыллығы ҡотло булһын!*




# ҠОЯШЛЫ ҠАЛА

*Өфөләрҙән ҡояш сығалыр ул -*
*Яҡтылығы алыҫ тарала.*
*Кешеләрҙәй, нурлы сырайлы,*
*Булалыр ул тик сал ҡалалар.*

*Бында башҡорт артҡан һайын, гүйә,*
*Көләсләнә йөҙө ҡаланың.*
*Ихласлыҡҡа биҙәк булам тиеп,*
*Шул ҡаланы мин дә һайланым.*

*Бында башҡорт артҡанғалыр шулай*
*Бик йыш килә төрлө ҡунаҡтар.*
*Улар беҙгә байрам ғәме өҫтәп,*
*Ҡанатланып ҡайтҡан һымаҡтар.*

*Туған телдең моңо иркәләгәс,*
*Урамдарҙың йөҙө яҡтырак.*
*Майҙандар киң һәм аяҙ булғанға*
*Ҡурай моңо аҡты бик йыраҡ.*

*Уйсан убаларҙа - көләс сырай,*
*Һағышы ла яҡты ҡаланың.*
*Бер яратҡан бәндәһеләй, Өфө -*
*Яратҡанылыр ул Алланың.*

*Төндәренең уның үҙ нуры бар,*
*Гел йондоҙло кеүек көндәре.*
*Хыялымды ысын иткән ҡалам,*
*Аяҙлана һиндә өндәрем.*

Лариса АБДУЛЛИНА.



12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# ТӘРӘН МӘҒӘНӘЛЕ...



**Ҙур түҙемһеҙлек менән буяу еҫтәре аңҡып торған гәзит-журналдарҙы көтөп алған заманалар әле генә кеүек. Өйгә килгән ваҡытлы матбуғатҡа өҫтәп, эшкә барышлай баш ҡаланың Свердлов урамында урынлашҡан "Өфө-баҫма" киоскыһына сират тороп, гәзиттәр һатып алыныр ине. Парк эскәмйәләрендә гәзит һәм журнал тотоп уҡып ултырыусылар ҙа гәҙәти күренеш булды. Эйе, эйе, бөгөн нисек телефондан күҙҙәрен алмайынса ултырһалар, бынан 10-20 йыл элек кенә әле ҡулдарҙа гәзит булды.**

"Хәҙер ҙә гәзит уҡыйҙар, ләкин электрон вариантын", тиеүселәр булыр. Әлбиттә, ризалашмай булмай, уҡыйҙарҙыр, сөнки нисек кенә булмаһын гәзит-журналдар тормошобоҙҙоң айырылғыһыҙ күренеше ул. Шулай ҙа минең әле булһа ҡулыма гәзитте шытырҙатып алып уҡымайынса, тынһығым ҡанмай. Өйгә лә яҙҙырам, магазин һәм башҡа урындарҙа буш таратылғандарын да алып уҡыйым, почтаға инеп һатып та алып ҡайтам - бәләкәйҙән ҡанға һеңгән гәзит һәм журнал уҡыу.

Республикала донъя күреп килгән байтаҡ ҡына гәзит-журналдарҙы бер йылға яҙҙырам, сөнки ярты йылдан һуң ул онотолорға мөмкин. "Киске Өфө" гәзитен дә күптән алдырып уҡыйым, ул минә йөкмәткеһе менән дә, материалдарҙың бирелеше менән дә, биҙәлеү йәһәтенән дә оҡшай. Тағы ла гәзиттең аҙнаһына бер, әммә берәгәй сығыуы оҡшай. 16 биттән торған гәзитте рәхәтләнеп, тәмләп бер аҙна уҡырға була.

Йөкмәткеһенә килгәндә, нимә күңелгә яҡын һуң? "Аҡыл - ҡаҙна" рубрикаһы хаҡында күптәр маҡтап яҙҙы. Мин дә уларҙың һүҙҙәренә ҡушылам һәм гәзит хеҙмәткәрҙәренә ошо рубриканы даими алып барғандары өсөн рәхмәт һүҙҙәремде еткерәм. Кинәйә менән бирелгән аҡылды уҡыуы ла еңел, хәтерҙә лә еңел ҡала. Фәүзиә Мөхәмәтшинаның "Донъя шаңдауы"н көтөп алам. Донъяла булып яткан хәлдәрҙә бик үк аңлап бөтөп тә булмай бит, ә был рубрикала ул ваҡиғаларҙы беҙ нисек аңларға тейеш, шулай төшөндөрөп бирә автор.

Гәзиттең "Улар башҡорт мәктәбендә уҡыны!" исемле яңы проекты ла бик урынлы һәм ваҡытлы. Интернеттағы әллә ниндәй бер көнлөк "знаменитость" тигәндәрен ҡарап, шулар тураһында ғына хәбәрҙәр булып үҫеп килгән йәш быуынға ошондай зыялыларыбыҙ тураһында күберәк мәғлүмәт еткереү бик тә мөһим. Рубрика ҡыҫҡа ла, йөкмәткеле лә.

Баш ҡалаға ҡағылышлы хәбәрҙәрҙе лә беренселәрҙән булып уҡып сығам. Ошо ҡалала ғүмер иттелһә лә, ул-был үҙгәрештәр ҡайһы саҡта күҙ уңынан ысҡынып китә. Ә "Киске Өфө" битендә бирелгән яҙмалар үҙ эсенә мөһим күренештәрҙе, үҙгәрештәрҙе, яңылыҡтарҙы алыуы менән мәғәнәле. Шулай уҡ "Баш ҡалам" рубрикаһын да ҙур ҡыҙыҡһыныу менән күҙәтеп барам.

Ғөмүмән алғанда, "Киске Өфө" беҙҙең өсөн бик тә кәрәкле, файҙалы, фәһемле баҫма. Ул эргә-тирәләге күренештәргә яңы күҙлектән сығып ҡарарға мөмкинлек бирә, билдәле милләттәштәр менән таныштыра. Еңел-елпелеккә ҡоролоп бөтөп барған ваҡытлы матбуғат донъяһын ошондай тәрән мәғәнәле, эстәлекле, эшлекле гәзиттәр юғары кимәлдә тотоп килә.

**Әлфир ҒӘНИЕВ.**

БЫЛ АЙҘА...

**Бына көҙ ҙә тып итеп тупһаға килеп баҫты. Һәр миҙгел үҙ хоҡуғын күрһәтергә әҙер генә торһа ла, бурыстары буталыбыраҡ китте бит әле. Әле бына йәй үҙенең юғалтылған мәрәйҙәрен көҙҙөң тәүге айы - һарысайҙа ҡайтармаҡсы, ти. Булһа, булыр ҙа, йәй һынлы йәй күрелмәне бит. Интернет сығанаҡтарында белгәне-белмәгәне лә кемуҙарҙан көҙгө айҙарға фараздар бирә башланы. Әҙәм балаһын да аңларға була: йәй ҡанмаған танһыкты ҡандырып, ҡояшҡа иркәләнергә, уның "бәрхәт" нурҙары аҫтында ҡыҙынырға, тау-урмандар ҡыҙырырға теләүселәр ҙә байтаҡтыр.**

# КӨҘҘӨҢ БЫЛ МИҘГЕЛЕН...

## йәй айына индерәйексе әле



Әбына ауыл халҡы, һуң булһа ла, уң булһын, тип, ниһайәт, бесәнен эшләп алыр ине. Йәй осоронда ямғырҙан ҡотороп үҫкән ҡайырып сапҡыһыҙ үлән һарысайҙа ҡыуара, еңеләйә, сабып барырҙар - артынса йыйып-ҡоя барырҙар. Хоҙай уларҙың эшенә еңеллек, аяҙ көндәр һәм дә бәрәкәт бирһен! Ә бит тарихта ундай хәлдәр булмаған түгел: әсәйемдең бер шулай, бесәнде сентябрҙә эшләп алдыҡ, тигәне хәтергә килеп төштө. Тарих ҡабатлана, тигәндәре раҫтыр. Айырыуса көн торошона ҡағылышлы, сөнки бындай тәбиғәт катаклизмдары циклдап нисәлер йылға бер әйләнеп ҡайтыуысан, ти бит фенологтар ҙа. Юғиһә, бәғзе берәүҙәр ғүмерҙә булмаған күренеш иҫәпләп, быйылғы ямғырҙан һиу баҫыуҙарҙы туфан ҡалҡыу билдәһе тип юрай һалды. Эйе, тәбиғәттең әҙәм балаһынан да ҡеүәтлерәк икәнен, артыҡ шашыу, тәбиғәтте юҡ итеү менән булышыуҙың файҙаһыҙ һәм күрәләтә аҡылһыҙлыҡ икәнен аңлатырға теләйҙер шулай Аллаһы Тәғәлә, тик быны аңлай микән һуң бөгөн һәр нәмәнән файҙа ғына ҡайырып, аҡса тип күҙе тонған әҙәм ишараты?..

Синоптиктарҙың һарысайға күҙаллауҙарынан сығып фекер йөрөткәндә, көҙҙөң тәүге айы йәйҙән дүртенсе айы дауамы булыу ихтималлығы аңлашыла. Сентябрь йылы һәм ҡоро көндәрҙән башлана, ти улар. Был айырыуса Мәскәү һәм уның эргәтирә төбәктәре өсөн хас булаsаҡ. Һауа температураһының йәйгесә 25-29 градусҡа тиклем йылыныуы көтөлә. Ләкин икенсе ун көнлөктә ҡойма ямғырҙар, ел-дауыл сығыуы ихтимал. Эҫе көндәр һәм тынсыу һауа торошо Санкт-Петербург менән Ленинград өлкәһен генә түгел, Волга буйы һәм Урал төбәктәрен дә солғап аласаҡ, тип тәкрарлай һауа торошо белгестәре. Урал буйы һәм Себерҙә, өҫтәүенә, ҡойма ямғырҙар айлыҡ норманан ашып китер, тип вәғәҙәләй улар. Ярай, йырҙа йырланғанса, тәбиғәттең насар көнө юҡ, һәм беҙ уның ниндәйенә лә әҙербеҙ, тик хәйере менән килһен, туламаһын, халыҡҡа ауырлығын һалмаһын ине, уға былай ҙа еңел дән түгел...

Әйткәндәй, һәр быуын үҙ күрәсәген күрә, тиҙәр бит. Көн яманын кисереп булыр ҙа ул, тик бына йорт-илебеҙгә имгенлек килеп, тиҙерәк тыныслыҡ урынлашһын ғына. Юғиһә, беҙҙең атай-әсәйҙәр, ҡартатай-өләсәйҙәр кешелек тарихындағы иң ҡаты һәм ауыр һынау - Икенсе бөтә донъя һуғышы **(1 сентябрь 1939 йыл - 2 сентябрь 1945 йыл)** фажиғәһен үҙ баштарынан кисереп киттеләр. Был оло яуҙа донъялағы барлығы 74 илдән 62 дәүләт һәм кешелектең 80 проценты - 2 млрд самаһы кеше ҡатнаша. Һуғыш уты 40 илде ялмай, хәрби хәрәкәттәргә 100 млн кеше йәлеп ителә. Ошо һуғышта 70 миллиондан ашыу кеше, күбеһенсә тыныс халыҡ һәләк була. Совет ғәскәренең Берлинға еңеүле юлында нацистик Германияны тулыһынса тар-мар итеү маҡсатында Көнсығыш Европа илдәрен фашизм ҡоллоғонан ҡотҡарыу бурысы ҡуйыла һәм 1944 йылдың йәйенән алып 1945 йылдың 9 майына тиклем Европаны азат итеү операцияһы бара. Был осор эсендә Чехословакия **(20, сентябрь, 1944)**, Эстонияның баш ҡалаһы Таллинн **(22, 1944)**, Венгрия **(23,1944)**, Югославия **(28, 1944)**, башҡа айҙарҙа шулай уҡ Польша, Румыния, Болгария урындағы Гитлерға ҡаршы азатлыҡ хәрәкәттәре бу-

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓Башҡортостан Башлығы Хөкүмәттең оператив кәңәшмәһендә Өфөнөң 450 йыллыҡ юбилейына саҡырылған ҡунаҡтар хаҡында әйтте. Улар иҫәбендә Президенттың Волга буйы федераль округындағы тулы хоҡуҡлы вәкиле Игорь Комаров, Абхазия президенты Аслан Бжания, Беларусь премьер-министры Роман Головченко бар. Баш ҡаланың юбилейына Ҡаҙағстандың, Үзбәкстандың рәсми делегациялары, Волга буйы федераль округы төбәктәре башлыҡтары, ҡала мэрҙары килә.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Геройҙар ваҡыты" III Бөтә Рәсәй патриотик йырҙар асыҡ конкурсы еңеүселәренә наградалар тапшырҙы. Мәсәлән, "Йыр авторы" номинацияһында беренсе урынды Өфөнән Рәмил Бәҙәмшин һәм Донецк Халыҡ Республикаһынан Елена Юрченко бүлеште. "Һүҙҙәр авторы" номинацияһында Өфөнән Олег Миңлеғәлиев еңеү яуланы. Рәсәй Милли гвардияһы ғәскәрҙәренең өлгәлә-күрһәтмә оркестры начальнигы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы, полковник Азат Шаһмөхәмәтов рәхмәт хаты менән билдәләнде.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың Балаҡатай, Благовар, Илеш, Ҡырмыҫҡалы, Мәләүез, Мишкә, Нуриман, Салауат, Стәрлетамаҡ, Өфө, Учалы, Хәйбулла һәм Шишмә райондары ауыл биләмәләре етәкселәре семинарында ҡатнашты һәм республиканың идара итеү командаһының төп бурыстарын билдәләне. Ул Рәсәй Геройы Максим Серафимов исемендәге "Патриот" хәрби-патриотик паркында үтте.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров төбәктең террорға ҡаршы комиссияһы һәм оператив штабтың берлектәге ултырышын үткәрҙе. Көн тәртибендә - Өфөнөң 450 йыллығын һәм Белем көнөн байрам итеү, шулай уҡ республика Башлығын һайлауҙа тауыш биреү осоронда иәмәғәт иминлеген тәьмин итеү мәсьәләләре. "30 һәм 31 августағы байрам сараларына ҡала майҙандары һәм парктары йәлеп ителәсәк, - тине Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров. - Был биләмәләрҙең барыһы ла махсус контролдә һәм тәүлек әйләнәһенә һаҡ аҫтында булырға тейеш".

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров сираттағы "Инвестиция сәғәте"н үткәрҙе. Унда сәнәғәттә һәм туризм өлкәһендә яңы проекттар ҡаралды. Мәсәлән, фермер хужалығы етәксеһе Илдар Миңнәжев Белорет районында "Ете ағай-эне" туристик базаһын төҙөү пландары хаҡында һөйләне. Эшҡыуар проектты 2025 йылда тамамларға ниәтләй. Республиканың инвестиция комитеты проектты өҫтөнлөклө тип тапты, шулай уҡ инженер һәм транспорт инфраструктураһын төҙөүгә сығымдарҙың бер өлөшөн ҡапларға тәҡдим итте.

✔ *Интернет селтәрендәге яңылыҡтар таҫмаһы улар ҡатнашлығында әле тегендә, әле бында булған авариялар тураһындағы хәбәрҙәр менән тулы. Ни өсөн атай-әсәйҙәр бер нәмә лә уйламай икән?*



лышлығында нацизм тырнағынан йолоп ҡалына.

Ләкин Германияны еңеү менән генә СССР өсөн һуғыш тамамланмай әле. Алыҫ Көнсығышта һәм Тымыҡ океанда ҡеүәтле Квантун армияһы булған Япония АҠШ менән Бөйөк Британияға ҡаршы һуғыша. Ул ваҡыттағы үҙенең союздаштарына СССР Ҡырым һәм Потсдам конференцияһы ҡарарҙары нигеҙендә ярҙамға килә һәм Японияға ҡаршы һуғышҡа ҡушыла, сөнки Советтар Союзы сик буйҙарында ла Японияның Квантун армияһы ғәскәрҙәре төп көстәрен туплай, ә был ил хәүефһеҙлегенә янай. Шуға күрә Ҡыҙыл армия 1945 йылдың 9 авгусында милитаристик Японияға ҡаршы Маньчжурияла, Кореяла, Көньяҡ Сахалинда һәм Курил утрауҙарында һыуҙан да, һауанан да, ҡоро ерҙән дә киң ҡоласлы һөжүм башлай һәм 10 көн эсендә японДарҙы капитуляцияға әҙер булыуҙары хаҡында белдерергә мәжбүр итә. Әсирлеккә төшкән япон генерал-лейтенанты Симидзу Норицуне: "Рус армияһы тайғаның йырып үткеһеҙ райондарын аша сығыр тип уйламағайныҡ та хатта. Рустарҙың йәшен тиҙлегендәй һөжүме беҙҙең өсөн көтөлмәгәнсә булды" ,- тип белдерә. Шулай итеп, **1945 йылдың 2 сентябрендә** Япония СССР, Бөйөк Британия һәм АҠШ алдында һис һүҙһеҙ капитуляция тураһындағы Актҡа ҡул ҡуя. Ләкин РФ Федераль законы менән Японияны еңгән һәм Икенсе донъя һуғышының тамамланған көнө тип **3 сентябрь** билдәләнә. Был еңеү һөҙөмтәһендә СССР Көньяҡ Сахалин менән Курил утрауҙарын ҡайтара, ләкин Япония бөгөнгәсә Курилдарҙы үҙенең "төньяҡ биләмәһе" иҫәпләй һәм нигеҙһеҙ рәүештә дәғүә белдерә килә. Был хаҡта БМО Уставында ла хатта айырымасыҡ белдерелә: "Икенсе донъя һуғышында еңеүсе ил ҡаҙаныштары ҡайтанан ҡаралмаясаҡ... Шуның өсөн Токио Советтар Союзына күскән утрауҙарға үҙенең суверенитетын белдерә алмай..." Заманында әһәмиәте баһалап бөткөһөҙ тип иҫәпләнгән Японияны еңгән көн дә байрам ителгән илебеҙҙә һәм рәсми ял көнө булған, ә бөгөн ул Рәсәйҙең хәрби дан көнө булараҡ билдәләнә.

**Был айҙағы иҫтәлекле һәм күренекле көндәр:**

Белем көнө **(1)**; фашистик Германияның Польшаға баҫып инеүе. Икенсе донъя һуғышының башланған көнө **(1 сентябрь, 1939 йыл)**, Нефть һәм газ сәнәғәте эшсәндәре, Р.Ғарипов исемендәге республика Башҡорт гимназия-интернаты асылыуға - 80 йыл **(1, 1944)**, Күмертау ҡалаһындағы бөгөн М.Рәхимов исемен йөрөтөүсе 3-сө республика Башҡорт гимназия-интернаты асылыуға 65 йыл **(1, 1959)**, Рәсәй гвардияһы көнө **(2)**, Рәсәйҙең хәрби дан көнө. Милитаристик Японияны еңгән һәм Икенсе донъя һуғышы тамамланған көн **(1, 1945)**, Терроризм менән көрәштә теләктәшлек көнө **(3)**, Сибайҙа төҙөлөш һәм сервис колледжы асылыуға 70 йыл **(3, 1954)**, Халыҡ-ара мәрхәмәтлек, Зәңгәр күк хаҡына халыҡ-ара таҙа һауа көнө **(7)**, М.И. Кутузов етәкселегендәге рус армияһының француз армияһы менән Бородино һуғышы **(8, 1812)**, Ленинград блокадаһы башланған көн **(8 сентябрь 1941 - 27 ғинуар 1944)**, Танкист, Торна, Грамоталылыҡ, Фашизм ҡорбандары иҫтәлеге, Донъя журналистарының теләктәшлек көндәре **(8)**, Халыҡ-ара матурлыҡ **(9)**, Тәрбиә эше органдары белгестәре **(11)**, БР халыҡтарының милли кейемдәре **(13)**, Тәүге медицина ярҙамы күрһәтеү **(14)**, Урман эшсәндәре, Халыҡ-ара демократия **(15)**, Озон ҡатламын һаҡлау буйынса халыҡ-ара **(16)**, Бөтөн донъя пациенттар хәүефһеҙлеге **(17)**, Кадрҙар менән эшләүсе белгестәр, Халыҡ-ара тигеҙ эш хаҡы **(18)**, Ҡорал яһау оҫтаһы **(19)**, Халыҡ-ара тыныслыҡ **(21)**, Халыҡ-ара автомобилһеҙ **(22)** көндәр, Совет ғәскәрҙәренең Эстония баш ҡалаһы Таллинды азат иткән **(22)**, Чехословакия **(20, 1944)**, Венгрия **(23, 1944)** биләмәләренә ингән көндәр, Ядро ҡоралын тулыһынса юҡ итеү өсөн халыҡ-ара көрәш **(26)**, Тәрбиәселәр һәм мәктәпкәсә бөтөн хеҙмәткәрҙәр, Туризм **(27)**, Совет ғәскәрҙәренең Югославия биләмәһенә ингән **(28, 1944)** көндәр, Машина эшләүселәр, Бөтөн донъя йөрәк **(29)** һәм Интернет **(30)** көндәре.

**Һарысайҙа тыуғандар:**

**5 -** ғалим-әҙәбиәт белгесе, филология фәндәре докторы, Өфө фән һәм технологиялар университетының Бөрө филиалы профессоры, БР-ҙың атҡаҙанған халыҡ мәғарифы хеҙмәткәре **Ришат ХӘСӘНОВҡа - 70 йәш** (1954).

**-** БР "Адаптив спорт үҙәге" спорт мәктәбенең тренер-уҡытыусыһы, биатлон буйынса Рәсәйҙең атҡаҙанған тренеры, 2-се дәрәжә "Ватан алдындағы хеҙмәттәре өсөн" ордены кавалеры **Салауат ҒҮМӘРОВҡа - 55 йәш** (1969).

**7 -** тарих фәндәре докторы, Рәсәй Фәндәр академияһының социаль реформалар, хәрәкәттәр һәм революциялар тарихы буйынса Ғилми совет секретары, сығышы менән Иглин районы Меңйетәр ауылынан **Салауат ИСХАКОВҡа - 65 йәш** (1959).

**10 -** хәрби эшмәкәр, контр-адмирал, хәрби фәндәр докторы, Ҡыҙыл Йондоҙ һәм Батырлыҡ ордендары кавалеры, сығышы менән Күгәрсен районынан **Батыргәрәй ЗӨЛҠӘРНӘЕВҡа - 75 йәш** (1949).

**22 -** табип-хирург, онколог, БР Беренсе саҡырылыш Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаты, Башҡортостандың атҡаҙанған табибы **Жәүәт ҒАЙСИНға - 70 йәш** (1954).

**24 -** журналист, "Башҡортостан журналдары" нәшриәт йорто директоры, Рәсәйҙең - атҡаҙанған мәҙәниәт һәм Башҡортостандың атҡаҙанған матбуғат һәм киң мәғлүмәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин һәм Ш Бабич премиялары лауреаты **Сәлмән ЯРМУЛЛИНға - 55 йәш** (1969).

**25 -** Башҡортостандың - атҡаҙанған, Рәсәйҙең почетлы нефтсеһе, бизнесмен, меценат, Салауат Юлаев ордены кавалеры **Зиннур ИСХАҠОВҡа - 70 йәш** (1954).

**28 -** ғалимә-химик, ауыл хужалығы фәндәре докторы, химия фәндәре кандидаты, Башҡортостандың атҡаҙанған ауыл хужалығы хеҙмәткәре **Наилә ИШМОРАТОВАға - 70 йәш** (1954).

**29 -** шағир-импровизатор, БАССР-ҙың халыҡ сәсәне **Сәйет ЙӘРМИҙең** (Сәйетғәли Исмәғилов) **тыуыуына - 140 йыл** (1884-1972).

**30 -** журналист, яҙыусы, филология фәндәре кандидаты , Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ш. Хоҙайбирҙин премияһы лауреаты **Ризван ХАЖИЕВтың тыуыуына - 85 йыл** (1939-2013).

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*БАШ ҠАЛАМ*



# ТАШ ТҮШӘЛГӘН УРАМДА...

**Өфө - минең тыуған ҡалам, балаларымдың донъяға ауаз һалған ҡалаһы, бөтә ғаиләбеҙ менән ятраҡан төйәгебеҙ. Өфөлә барған үҙгәрештәрҙең һәр береһен күңелебеҙ аша үткәрәбеҙ, уның менән бергә һөйөнәбеҙ һәм көйөнәбеҙ.**

Хәл итәһе мәсьәләләр ҙә етерлек Өфөбөҙҙә, шул уҡ ваҡытта ыңғай яҡҡа үҙгәрештәр ҙә күп. Бигерәк тә республикала тормошҡа ашырылған "Башҡорт ихаталары" программаһының әүҙем эшләүе һәм баш ҡалала ла, башҡа урындарҙа ла халыҡтың йәшәйешен бермә-бер яҡшыртыуы шатландыра. Мәҫәлән, мин йәшәгән Ҡуласа (Кольцевая) урамы 170/1 адресы буйынса урынлашҡан йорттың таш-бетондан эшләнгән подъезд түбәһе күптән алыштырыуҙы талап итә ине. Ошо көндәрҙә уны яңыртып ҡуйҙылар. Бәләкәй генә эш кеүек, әммә ул ошонда йәшәүселәрҙең хәүефһеҙлеген тәьмин иткән ҙур башланғыс.

Баш ҡалала иҫтәлекле урындар бихисап. Урамдар буйлап барлай башлаһаң да, ниндәйҙер үҙенсәлекле, ҡыҙыҡлы, мөһим фактты асыҡларға була. Телеүҙәк яғындағы Тракт (Трактовая) урамын ғына алып ҡарайыҡ. Урам 200 йыл элек түшәлгән таштарҙан тора! Александр I килеүе уңайынан түшәлгән таштар әле булһа хеҙмәт итә, Өфөнөң бер ҡабатланмаҫ үҙенсәлеге булып тора. Быйылғы көслө ямғырҙар ҡайһы бер таштарҙы йыуып алып китеүе тураһында уҡып, урам юҡҡа сығыр инде, тип хәүефләнеүҙәр юҡҡа булды - таштар урындарына ҡайтарылды, урамдың соҡорҙары ямалды. Ҡала хакимиәтенең тарихҡа ҡарата булған иғтибары маҡтауға лайыҡ. Бәлки, был урамды туристар өсөн тәғәйенләнешле итеп, нисектер ҡулайлаштырыу ҙа яйлы булыр ине, тип тә уйланыла.

Өфөләрҙең яртыһы ҡала районДарына ҡараған ауылдарҙа шәхси йорттарҙа йәшәй. Быйыл ошондай ауылдарҙың төп бәләһе - питбайк, мотоцикл, квадроциклдарҙа йөрөүсе балалар һәм үҫмерҙәр. Әйтергә кәрәк, яңылыҡтарҙан күреүебеҙсә, республиканың башҡа төбәктәрендә лә ошо хәл. Ҙур тиҙлектә күҙҙәренә аҡ-ҡара күренмәй сапҡан был балалар үҙҙәренең дә, башҡаларҙың да һаулығын һәм ғүмерен хәүеф аҫтына ҡуя. Интернет селтәрендәге яңылыҡтар таҫмаһы улар ҡатнашлығында әле тегендә, әле бында булған авариялар тураһындағы хәбәрҙәр менән тулы. Ни өсөн атай-әсәйҙәр бер нәмә лә уйламай икән? Бала ни, мотоцикл алып бирмәгән өсөн бер үсегер ҙә яҙылыр, ә аварияға осрай ҡалһа, нимәләр кисерерһегеҙ һуң?

Баш ҡалабыҙ йылғалар уратып алған тау битендә урынлашҡан. Беҙҙең изге бурысыбыҙ ошо йылғаларҙы таҙалыҡта тотоу, сөнки улар беҙҙең өсөн йәшәү сығанағы. Был йәһәттән файҙалы ғына эштәр башҡарыла - йылғалар таҙартыла, селбәрәләр ебәрелә. Бындай эштәр республиканың бөтә йылға-күлдәрендә лә башҡарылалыр, тип уйлайым.

Өфөнөң тарихи үҙәгендәге иң матур урамдарҙың береһе - Коммунистик урам. Бигерәк тә йәйәүлеләр өсөн уңайлы ул, сөнки киң дә, төҙөк тә. Ә күптән түгел ултыртылған йүкә ағастары берегеп үҫеп китер һәм тағы ла йәм өҫтәр. Ошондай уҡ төҙөкләндереү, йәшелләндереү эштәре Черниковка, Һупайлы биҫтәләрендә, Кузнецов Затонында ла ойошторолһа ине, тигән теләктә ҡалам, сөнки Өфө хаҡында тәьҫораттар тик тарихи үҙәктән сығып ҡына тупланмай бит.

Йәшелләндереү темаһына ҡағылғанда иһә... Элек Октябрь проспекты буйлап иртә яҙҙан ләлә сәскәләре күҙҙең яуын алып ултыра ине, һуңғы йылдарҙа ни өсөндөр сәскәләр күренмәй. Шул тиклем матур күренеш була торғайны, бәлки, икенсе йыл проспект тағы ла сәскәләргә күмелер.

Баш ҡалабыҙҙы юбилейы менән тәбрикләйем. Тәүлек әйләнәһенә тормош гөрләгән миллионлы ҡала артабан да матур ваҡиғалары һәм ыңғай үҙгәрештәре менән ҡыуандырып торһон.

**Дилә ӘХМӘТОВА,**
**балалар баҡсаһы тәрбиәсеһе.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✔Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров "Өфө" индустриаль паркында "БР Моторс" компанияһы производствоһы менән танышты. Предприятие 2020 йылдан юғары үтеүсәнлеккә эйә, ҡарҙан һәм һаҙлыҡлы урындарҙан йөрөй алыусы квадроциклдар сығара. Республика етәксеһе техника етештереүҙең технологик процесы менән танышты һәм техниканың мөмкинлектәрен юғары баһаланы, төбәктә бизнес өсөн әҙер сәнәғәт майҙансыҡтары булдырыуҙың мөһимлеген билдәләне.

✔Ишембайға эш сәфәре барышында Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Александр Матросов исемендәге үҙәк мәҙәниәт һәм ял паркында булды. "Бында дискотекаларға йөрөүемде хәтерләйем. Ә һуңынан был парк ташландыҡ хәлгә төштө. Хәҙер ул үҙгәрҙе - минеңсә, яҡшы килеп сыҡты, - тип йомғаҡ яһаны төбәк етәксеһе Радий Хәбиров. - Иң мөһиме - Ишембай ҡалаһы федераль конкурста еңде, муниципалитет "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" проекты буйынса ла, бюджеттан тыш та аҡса йәлеп итә алды".

✔Башҡортостан Башлығы Ишембайҙа "Алға" махсус иҡтисади зонаһының Күҙәтеү советы ултырышын үткәрҙе. "Алға" махсус иҡтисади зонаһы уңышлы майҙансыҡҡа әйләнде, Ишембай районы иҡтисады, шулай уҡ Стәрлетамаҡ, Салауат һәм Ишембай агломерацияһы үҫешенә етди импульс бирҙе, - тине республика Башлығы.- Хәҙер "Алға"ла 22 резидент бар. Уларҙың бишәүһе үҙ производстволарын асты, тағы ла дүртәүһе - төҙөлөш этабында. Инвесторҙар 7,5 миллиард һум аҡса һалған, 950 эш урыны булдырған".

✔Башҡортостан Башлығы Ишембай районына эш сәфәре сиктәрендә Һайран ауылында яңы янғын һүндереү часы эше менән танышты. Майҙаны 743,5 квадрат метрлыҡ заманса бина республика Янғынҡотҡарыу көстәрен үҫтереү стратегияһы сиктәрендә төҙөлгән. "Бер ни тиклем ваҡыт элек беҙ ауыл халҡы, яҡташтарыбыҙ менән бында яҡын-тирәләге тораҡ пункттарҙың, яҡынса 5 мең кешенең, янғын хәүефһеҙлеген тәьмин итәсәк депо төҙөү тураһында килешкәйнек. Миңә ҡалһа, яҡшы килеп сыҡты", - тип һыҙыҡ өҫтөнә алды Радий Хәбиров.

✔Башҡортостан Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары - ауыл хужалығы министры Илшат Фәзрахманов билдәләүенсә, әле 200 мең гектарҙан ашыу майҙанда уңыш йыйып алынған (10 процент), иген һәм ҡуҙаҡлы иген культуралары 250 мең гектарҙа сабылған (15 процент). Тулайым йыйым 670 мең тонна иген тәшкил иткән, уңыш - гектарынан 28 центнер, ужым культуралары - гектарынан 30 центнерҙан ашыу. Шәкәр сөгөлдөрөн ҡаҙыу башланған.

✓ ***"Быйыл 206 автомобиль тапшырабыҙ. Был медицина үҫешенә етди этәргес булып тора. Тап ошоно беҙ медицинаны кешеләргә яҡынайтыу тип атайбыҙ ҙа инде", - тине Башҡортостан Башлығы.***



*ТӨРЛӨҺӨНӘН*

# ШАЙМОРАТОВҠА АРНАП...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң Совет майҙанында Рәсәй Геройы, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың тыуыуына 125 йыл тулыуға һәм Өфөнөң 450 йыллығына арналған III "Геройҙар ваҡыты" Бөтә Рәсәй патриотик йыр конкурсында ҡатнашыусыларҙы сәләмләне.**

"Милли геройыбыҙ, генерал-майор Миңлеғәле Шайморатовтың тыуыуына 125 йыл тулыуҙы билдәләгән көндә өсөнсө тапҡыр патриотик йыр фестивален үткәрәбеҙ. Һәм уны Совет майҙанында ойоштороуыбыҙ дөрөҫ, сөнки бында 1942 йылдың февралендә Миңлеғәле Минһаж улына формалашыусы 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһының хәрби байрағын тапшырғандар. Тап ошонан егеттәребеҙ Махсус хәрби операцияға бурыстарын үтәргә юлландылар, - тине Радий Хәбиров. - Минең янымда - Шайморатов генерал ордены кавалерҙары, үҙ ваҡытында башҡаларҙы яҡлау, батырлыҡ һәм фиҙаҡәрлек юлын һайлаған хәрбиҙәр һәм табиптар, журналистар һәм уҡытыусылар. Һәм улар менән бергә, әлбиттә, заман һынауҙарын һәм ҡатмарлыҡтарын мотлаҡ үтәсәкбеҙ".

"Геройҙар ваҡыты" конкурсында тотош илдән композиторҙар һәм автор-башҡарыусылар ҡатнашты. Быйыл Рәсәйҙең 36 төбәгенән 300-ҙән ашыу ғариза ҡабул ителгән. Жюриҙы, ғәҙәттәгесә, Рәсәйҙең атҡаҙанған артисы Ольга Кормухина етәкләне, ул шулай уҡ концерт программаһы менән дә сығыш яһаны. "Ҡунаҡсыл Башҡортостанға конкурс өсөн рәхмәт, - тип билдәләне Ольга Кормухина. - Был фестиваль ғына түгел - ул бөйөк илдең бөйөк мәҙәниәте байрамы. Сәхнәлә төрлө халыҡтарҙың традициялары шул тиклем матур һәм органик үрелеп барҙы. Тап милли әҫәрҙәрҙән ҙур шатлыҡ кисерҙем - улар бик үҙенсәлекле, матур һәм мөһабәт яңғырай".

# УҢАЙЛЫ МӨХИТ

**Башҡортостан уңайлы ҡала мөхитен булдырыу өлкәһендәге I Милли премияның "Бәләкәй ҡалаларҙы һәм тарихи ауылдарҙы үҫтереү буйынса иң яҡшы төбәк" номинацияһында лауреат булды. Был хаҡта республика Башлығы Хөкүмәттәге оператив кәңәшмәлә хәбәр итте.**

- Бәләкәй ҡалаларҙа һәм тарихи ауылдарҙа уңайлы ҡала мөхитен булдырыуҙың иң яҡшы проекттары Бөтә Рәсәй конкурсында еңеүселәр һаны буйынса Башҡортостан илдә өсөнсө урынды биләй - биш йыл эсендә 29 проект еңеү яулаған. Муниципалитет башлыҡтарының һәм Башҡортостан ҡалаларын үҫтереү институтының бик һөҙөмтәле эше был, - тине төбәк етәксеһе. - Бәләкәй ҡалаларҙа һәм район үҙәктәрендә, ысынлап та, яңыртыуҙың билдәле бер этабы бара. Әммә эштәр күп әле. "Башҡортостан 3.0" стратегияһының мөһим элементы булып республикабыҙҙың барлыҡ ҙур тораҡ пункттарын үҙгәртеп ҡороуҙы тамамлау торасаҡ.

Теманы дауам итеп, төбәктең торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры Ирина Голованова "Торлаҡ һәм ҡала мөхите" милли проектының "Уңайлы ҡала мөхитен булдырыу" федераль проекты сиктәрендә биш йыл эсендә Башҡортостанда дөйөм суммаһы ете миллиард һумға 683 йәмәғәт биләмәһен төҙөкләндереүҙәре хаҡында хәбәр итте. 2024 йылда тағы ла 121 объектты яңыртыуҙы тамамларға планлаштыралар.

# ИШЕМБАЙҘА...

**Башҡортостан Башлығы Ишембайҙа "Башнефть" компанияһының генераль директоры Владимир Чернов менән бергә реконструкциянан һуң Башҡорт нефтен тәүге асыусылар майҙанын асыу тантанаһында ҡатнашты. Яңыртылған үҙәк майҙан Ишембай халҡына ҡала көнө уңайынан бүләк булды.**



Ҡала көнө хөрмәтенә төбәк етәксеһе дәүләт наградаларын тапшырҙы һәм III "Ретро-шлягер" халыҡ-ара ретро-йырҙар башҡарыусылар конкурсы еңеүсеһен ҡотланы. Быйыл төп приз - автомобилгә - Бөрйән районынан Айбулат Ишморатов лайыҡ булды.

"Башнефть" компанияһының генераль директоры Владимир Чернов та Ишембай халҡын Ҡала көнө менән тәбрикләне. "Ишембай - республикала нефть сәнәғәте үҫешә башлаған урын. Шуға күрә бөгөн яңыртылған Башҡорт нефтен тәүге асыусылар майҙанын асыу икеләтә ҡыуаныслы. Ишембайҙың үҙәк майҙанын яңыртыу концепцияһы һеҙҙең теләктәрегеҙҙе иҫәпкә алып әҙерләнде", - тине Владимир Чернов, ҡала халҡына мөрәжәғәт итеп.

Артабан Башҡортостан Башлығы һәм "Башнефть" компанияһының генераль директоры төҙөкләндерелгән йәмәғәт киңлеген, Ишембай предприятиелары һәм ойошмаларының күргәҙмәләрен ҡараны һәм ҡала халҡы менән аралашты. Нефть тармағы ветерандары һәм Ишембай халҡы ҡаланың төп майҙанындағы реконструкция эштәре өсөн рәхмәт белдерҙе.

# ЯҢЫ УҠЫУ ЙЫЛЫНА...

**Сентябрь башынан республика мәктәптәрендә 524,8 мең бала, шул иҫәптән 48 мең беренсе класс уҡыусыһы һәм Донбасстан 200 уҡыусы өсөн яңы уҡыу йылы башлана. Тантаналы линейкалар 2 сентябрҙә төбәктең барлыҡ белем усаҡтарында үтәсәк.**

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров уҙғарған оператив кәңәшмәлә мәктәп туҡланыуы мәсьәләләренә айырыуса иғтибар бүленде. Төбәктең мәғариф һәм фән министры Илдар Мәүлитбирҙин белдереүенсә, республикала башланғыс класс уҡыусыларын бушлай ҡайнар аш менән тәьмин итеүҙе дауам итәсәктәр. Кәңәшмәлә яңы уҡыу йылында юлдарҙа хәүефһеҙлек мәсьәләләре лә тикшерелде. 2024 йылда уҡыусыларҙы белем биреү учреждениеларына алып барыу өсөн өҫтәмә транспорт һатып алынған. Шулай уҡ, Рәсәй Хөкүмәте бойороғона ярашлы, Башҡортостанға тағы 50 мәктәп автобусы бүленгән - уларҙы 2024 йылдың өсөнсө кварталында көтәләр.

Башҡортостанда белем биреү учреждениеларын яңыртылған стандарттарға ярашлы дәреслектәр менән тәьмин итеү буйынса әүҙем эш дауам итә - бының өсөн республика бюджетынан 1,3 миллиард һум бүленгән. Финанс сараларын шул иҫәптән туған телдәрҙә дәреслектәр һәм әсбаптар һатып алыуға йүнәлтелгән. Мәктәптәр уҡыу программаһын үҙгәртеүгә лә әҙер. 2024 йылда яңы предмет - Ватанды һаҡлау һәм хәүефһеҙлек нигеҙҙәре - индерелә. Был дисциплинаны уҡытыу өсөн йәй барышында меңдән ашыу уҡытыусы әҙерләнгән. Белем көнөнә Башҡортостанда Өфөлә, Күмертауҙа, Стәрлетамаҡта, шулай уҡ Баймаҡ, Әбйәлил һәм Бишбүләк районларында алты яңыртылған мәктәп асыла. Был көндө Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балалары ла иғтибарҙан ситтә ҡалмаясаҡ. Радий Хәбировтың ҡушыуы буйынса, сараларҙа төбәк Хөкүмәте ағзалары, республика Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай депутаттары һәм башҡа абруйлы ҡунаҡтар ҡатнашасаҡ һәм Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларҙың балаларын мәктәптәргә оҙатасаҡ.

# МАШИНАҺЫҘ БУЛМАЙ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров республиканың 43 медицина ойошмаһына 135 LADA Granta автомобиле асҡыстарын тапшырҙы. Билдәләнеүенсә, йыл аҙағына тиклем тағы ла 70 машина тапшырыу көтөлә.**

Республика етәксеһе илебеҙҙә етештерелгән яңы техниканы ҡарап сыҡты. "Лада Гранта" автомобилдәре пациенттарҙы дауаханаларға һәм поликлиникаларға алып барыу өсөн тәғәйенләнгән. Машиналар республиканың алыҫ райондарында, айырыуса юлһыҙ урындарҙа алмаштырғыһыҙ. Улар уңайлы булыуҙары менән айырылып тора, заманса ҡорамалдар менән йыһазландырылған. "Быйыл 206 автомобиль тапшырабыҙ, улар ҡайһы берҙә егермешәр йыл файҙаланылған иҫкергән техниканы алмаштыра. Был медицина үҫешенә етди этәргес булып тора - ошо йылдар дауамында автопаркты яңыртыу буйынса эш алып барабыҙ. Тап ошоно беҙ медицинаны кешеләргә яҡынайтыу тип атайбыҙ ҙа инде", - тине Башҡортостан Башлығы. Автомобилдәр федераль һәм республика аҡсаһына һатып алынған, уларҙың дөйөм суммаһы - 162,4 миллион һум. "Һаулыҡ һаҡлау" милли проектының "Башҡортостан һаулыҡ һаҡлау тармағының беренсел звеноһын модернизациялау" төбәк программаһы сиктәрендә 657 берәмек автотранспорт һатып алыу планлаштырыла. 2021-2023 йылдарҙа 352 автотранспорт һатып алынған. 2024 йылда - 206, 2025 йылда иһә тағы 99 автотранспорт алыу күҙаллана.

# ДУҪЛЫҒЫБЫҘ - БАЙЛЫҒЫБЫҘ

**Башҡортостан Башлығы "БРИКС плюс" форматында VI Йәш дипломаттар форумында ҡатнашыусылар менән осрашты. Унда 30 илдән 110-дан ашыу вәкил ҡатнаша.**

- Был көндәрҙә беҙ ҡаланың 450 йыллығын билдәләйбеҙ. Беҙҙең Өфө - бай тарихы һәм күп милләт-

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфөлә Затон шоссеһын төҙөкләндереү эштәре башланды. Был турала Өфөнөң юлдар һәм яһалма ҡоролмалар төҙөү, ремонтлау идаралығының капиталь төҙөлөш бүлегенә һылтанма менән Ленин районы хакимиәте башлығы Олег Котов хәбәр итте. "Дортрансстрой" подряд ойошмаһы Затон күперенән алып ҡулсаға тиклемге участкала асфальттың өҫкө ҡатламын алмаштыра. Юл хеҙмәттәре ваҡытлыса уңайһыҙлыҡ өсөн ғәфү үтенә", - тип яҙҙы ул социаль селтәрҙәге сәхифәһендә.

✓Өфөлә ҡаланың 450 йыллығына арналған халыҡ-ара бәһлеүәндәр бәйгеһе ойошторола. Рәсәйҙең иң көслө кешеһе Эльбрус Ниғмәтуллин хәбәр итеүенсә, турнирҙа Рәсәй, Ҡаҙағстан һәм Ҡырғыҙстан стронгмендары ҡатнаша. Өфөләр һәм баш ҡала ҡунаҡтары Белгородтан донъя чемпионы Давид Шамей һәм Донъя кубогын алған Валерий Савин (Сорғот) араһындағы алышты ла ҡарай ала, тип билдәләне ул. Донъя кимәлендәге бәһлеүән Мөхәммәт-Али Тохтоматов та ошо титул өсөн көрәшәсәк. Халыҡ-ара бәһлеүәндәр турниры 31 августа көндөҙгө сәғәт 12-лә "Ҡашҡаҙан" паркында була.

✓Өфөлә пассажир транспортын тикшереү башланды. Уларҙың төп маҡсаты - аварияларҙы кәметеү, автобус водителдәренең юл ҡағиҙәләрен боҙоуын иҫкәртеү һәм ҡала транспортында пассажирҙар ташыу хәүефһеҙлеген арттырыу, тип белдерәләр Башҡортостандың Транспорт министрлығында. Автобустарҙың техник торошона, водителдәрҙең рейс алдынан медицина һәм техник тикшереү үтеүенә, уларҙың хеҙмәт һәм ял режимын, шулай уҡ пассажирҙарҙы ташыуҙа билдәләнгән нормаларҙы үтәүенә айырыуса иғтибар бүленә.

✓Башҡортостан спортсылары һәм уларҙың тренерҙары XVII Паралимпия йәйге уйындарында ҡатнаша. Республика исеменән Паралимпиадала йөҙөүселәр Богдан Мозговой, Аделина Рәзетдинова һәм Андрей Николаев, еңел атлеттар Антон Кулятин, Анна Кулинич-Сорокина, Елена Паутова, теннисса Елена Прокофьева сығыш яһай. Францияның баш ҡалаһында донъя кимәлендәге спорт ярыштары 8 сентябргә тиклем дауам итә.

✓Башҡортостан спортсыһы Эрнест Шәрәфетдинов каратэ буйынса Рәсәй чемпионатында өсөнсө тапҡыр еңеүсе булды. "Яҡташыбыҙ Эрнест Омск өлкәһенән Семён Грачевты 2:0 иҫәбе менән еңде. Эрнест - Башҡортостан физик культура институты студенты, ул июндә үткән БРИКС илдәре уйындарында ла еңеү яуланы. Бөгөн иһә өсөнсө тапҡыр Рәсәй чемпионы исеменә лайыҡ булды", - тине спорт министры Руслан Хәбибов.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ле мәҙәниәте булған заманса, матур, йәшел ҡала. Бында традицияларҙы хөрмәт итәләр. Шул уҡ ваҡытта Өфө - йәштәр, студенттар ҡалаһы. Бында һеҙҙең кеүек бик күп йәштәр йәшәй, уҡый һәм эшләй. Шул иҫәптән "Халыҡ-ара мөнәсәбәттәр" йүнәлеше буйынса ла. Бөгөн БРИКС-тың дәүләтара берләшмәһе илдәре яңы гәҙел донъя тәртибен булдырыуҙа төп ролен йылдан-йыл көсәйтә. Һеҙгә, йәш дипломаттар быуынына, дәүләттәребеҙҙең тышҡы сәйәси курсын тормошҡа ашырыу өсөн тағы ла күберәк яуаплылыҡ алыу бурысы һалынған.

Форумды Башҡортостанда - быуаттар буйына төрлө мәҙәниәттәр киҫелеше, көнсығыш һәм көнбайыш цивилизациялары диалогы булып торған төбәктә үткәреү символик мәғәнәгә эйә. Яҡшы күршеләр һәм бер-берендә ихтирам итеү, шулай уҡ тыңлай белеү быуаттар буйына бында дуҫ һәм татыу йәшәгән төрки, славян, фин-угыр халыҡтарының мәҙәни кодына индерелгән. Ата-бабаларҙан мираҫ булып ҡалған ошо дуҫлыҡ - беҙҙең төп байлығыбыҙ. Форум халыҡтар араһындағы дуҫлыҡты нығытыуға мөһим өлөш индерер тигән ышаныстамын. Уның бай йөкмәткеле программаһы баш ҡалабыҙҙы, Башҡортостандың бай мәҙәни-тарихи мираҫын лайыҡлы баһаларға мөмкинлек бирер тип уйлайым, - тине Радий Хәбиров.

## ИҪКЕЛӘР ЯҢЫРА

**2024 йылда Өфөлә мәҙәни мираҫ объекттарын реставрациялау буйынса эштәр әүҙем дауам итә. Баш ҡаланың 450 йыллығына әҙерлек сиктәрендә архитектура ҡомартҡыларын ремонтлауға 23 рөхсәт бирелгән.**

Был хаҡта республиканың Мәҙәни мираҫ объекттарын дәүләт һаҡлауы буйынса идаралыҡ етәксеһе Салауат Ҡолбахтин хәбәр итте. "Тарихи ҡиммәткә эйә булған бианларҙың фасадтарын һәм ҡыйыҡтарын тергеҙеүгә айырыуса иғтибар бүләбеҙ. Элемтә йорто, Коммерция училищеһы һәм Башпотребсоюз бинлары кеүек төп объекттарҙа фасадтарҙың штукатур-буяу ҡатламын тергеҙеү буйынса эштәр алып барыла", - тип билдәләне Салауат Ҡолбахтин. Билдәләнеүенсә, Өфөнөң 450 йыллығына әҙерлек сиктәрендә төрлө мәҙәни мираҫ объекттарында эштәр тамамлана. Мәҫәлән, Ленин урамы, 28 адресы буйынса урынлашҡан "Элемтә йорто"нда (Главпочтамт) төҙөкләндереү эштәре аҙағына яҡынлаша. Шулай уҡ Октябрь революцияһы, Карл Маркс һәм Зәки Вәлиди урамдарындағы тарихи бианлар ремонтлана. Барлыҡ эштәр ҙә бианларҙың тарихи ҡиәфәтен һаҡлауҙы тәьмин итеүсе дәүләт күҙәтеүе аҫтында башҡарыла.

Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөнөң үҙәк урамдарын тейешле хәлгә килтереү буйынса һуңғы йылдарҙа алып барылған эштең дауам итәсәген билдәләне. "Өфөнөң тарихи үҙәгенең нисек үҙгәреүен күрәбеҙ. Ҡалала үҙәк урамдарҙың тышҡы ҡиәфәтен планлы рәүештә матурланыҡ - тротуар плиткаларын яңырттыҡ, "Таҙа күк йөҙө" ҡала проектын тормошҡа ашырҙыҡ, уның сиктәрендә электр кабелдәрен ер аҫтына күсерҙек. Был саралар ҡаланың эстетик ҡиәфәтен етди үҙгәртә. Һәм бындай эште һәр ваҡыт алып барасаҡбыҙ", - тине төбәк етәксеһе Радий Хәбиров.

ӨФӨ - ТӘРТИПТӘ!



# БАЙРАМ БЕҘҘӘ, БАЙРАМ!

**Өфө халҡы Башҡортостан Республикаһының баш ҡалаһында башҡарылған матур үҙгәрештәр шаһиты бөгөн. Йылдан-йыл, айҙан-ай, көндән көн баш ҡалабыҙ күркәмләнә бара. Башланғыстар һәм эштәр бихисап. Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллығына арнап төҙөлгән, яңыртылған биналар, объекттар тураһында Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ратмир МӘҮЛИЕВ менән әңгәмәләшәбеҙ.**

**Ратмир Рафил улы, әйҙәгеҙ, яңыртылған баш ҡала мөхите объекттары тураһында айырым билдәләп үтегеҙ әле...**

- 2020 йылда илебеҙ Президенты Владимир Владимирович Путин Өфө ҡалаһына нигеҙ һалыныуға 450 йыл тулыуға бағышланған саралар тураһындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. Был рәсми документ республикабыҙ баш ҡалаһының юбилейына федераль статус бирҙе. Юбилейға әҙерлек эштәрен әүҙемләштереп, ҡуйылған маҡсаттарға, дөйөм алғанда, өлгәштек, тиһәк тә була: Өфө үҙенең 450 йыллығын яңыртылған ҡиәфәттә ҡаршы ала.

Файҙаланыуға тапшырылған иң сағыу юбилей объекттары араһында "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһын, Совет майҙанындағы Шайморатов генерал һәйкәлен, "Кашҡаҙан", "Түлҡын" парктарын, Аксаков исемендәге баҡсаны, Альбанов һәм Михалев исемендәге скверҙарҙы, Инорс биҫтәһендәге "Йылы күл" биләмәһен атап китергә булалыр.

Спорт яратҡан өфөләр өсөн "Физра-Р" һәм "Физра-Д" спорт комплекстары, Өлфәт Мостафин исемендәге спорт әҙерлек үҙәге, ишкәкле слалом өсөн ҡоролмалар комплексы айырыуса ҡиммәтле бүләк булды. 31 августа Спорт көрәше үҙәген асыу тантанаһы була. Ул донъя кимәлендәге ярыштарҙы үткәреү майҙанына әүерелер, тип ышанабыҙ.

Ошо көндәрҙә "Курайсы малай" фонтанында, Ҡурсаҡ театры алдындағы майҙанда, "Нефтехимик" мәҙәниәт һәм ял паркында төҙөкләндереү эштәрен тамамлайбыҙ. "Затон ҡулсаһы" биләмәһен яңырттыҡ. Көньяҡ инеү юлындағы йәшел "утрау"ҙы ла тәртипкә килтерҙек. Шулай уҡ күп фатирлы йорттар тирәһендәге тротуарҙарға гранит бурса түшәнек, "Таҙа һауа" проектын ғәмәлгә ашырыу уңышлы бара.

Юлдар һалыу, ағастар ултыртыу, бина фасадтарын төҙөкләндереү, архитектура объекттарына яҡтыртыу ҡоралмалары ҡуйыу, ял итеү өсөн уңайлы йәмәғәт арауығын булдырыу, автомобиль ҡуйыу урындарын билдәләү - барыһы ла комплекслы эшләнә.

**Миллионлы ҡалала йәшәүселәр өсөн уның мөхитенең экологияһы, санитар-гигиена халәтенең тейешле кимәлдә булыуы ҡала тормошо менән идара итеүселәрҙең даими хәстәрлеген талап итә. Баш ҡалабыҙҙың коммуналь хужалығы эшмәкәрлеген нисек баһалайһығыҙ?**

- Дөйөм алғанда, коммуналь хужалыҡ хеҙмәткәрҙәре үҙҙәре алдына ҡуйылған мәсьәләләрҙе уңышлы хәл итеп килә. Әммә, ҡайһы бер хәлдәр улар тырышлығынан ғына тормаҫҡа ла мөмкин. Мәҫәлән, 2024 йылға ҡала буйынса бөтә инженер инфраструктураһының туҙыуы 58 процент тирәһе тәшкил итә. Шуға әленән-әле ҡаланың йә бер, йә икенсе урынында көтөлмәгән авариялар булып тора. Был осраҡта коммуналь хужалыҡ вәкилдәренең килеп сыҡҡан ҡыйынлыҡтарҙы тиҙ арала хәл итә алыуы мөһим. Дөрөҫ, күп осраҡта ниндәйҙер көрсөктән сығыу өсөн кәрәкле белгестәрҙең етмәүе лә бәкәлгә һуға. Бөгөн коммуналь хужалыҡта эшләүселәрҙең эш хаҡы етерлек кимәлдә түгел. Йәштәр, юғары квалификациялы белгестәр был өлкәгә килергә атлыҡып тормай. Был юҫыҡта эшләйһе эштәр күп әле.

**Ҡалабыҙ урамдары төҙөкләндерелде. Әммә элек-электән ултыртылған ағастары ла киҫеп алынды. Ҡала үҙәге урамдарын йәшелләндереү проблемаһы нисек хәл ителәсәк?**

- Өфө Рәсәйҙең миллионлы ҡалалары араһында иң "йәшелдәрҙән" һанала. Был күрһәткес буйынса Башҡортостандың баш ҡалаһы өсөнсө урында тора. "Йәшел Башҡортостан" программаһы сиктәрендә быйыл ғына Өфөнөң юбилейына бағышланған 45 000 төп ағас һәм ҡыуаҡ ултыртылды. Легендар Өфө йүкәләре тураһында хафаланыусыларға шуны әйтер инем: уларҙың һаны кәмемәне, ә киреһенсә, артты ғына. Әлбиттә, бер ағас та мәңгелек түгел. Улар ҙа ҡартая. Бындай осраҡта беҙгә авария хәлендәге ағастарҙы ҡырҡыуҙан башҡа сара ҡалмай. Әммә улар урынына яңылары ултыртыла. Шуны һыҙыҡ өҫтөнә алып китеү мөһим: Өфөлә һәр ҡырҡылған ағас урынында өс яңы үҫенте урын ала.

**Өфө ҡалаһы округы хакимиәтенең эшмәкәрлегә ҡатмарлы һәм күп төрлө. Кешеләр ҡала хакимиәтенә ниндә-йәрәк һорауҙар менән күберәк мөрәжәғәт итә?**

- Күреүегеҙсә, ҡалала бер юлы әллә күпме проект алып барыла. Төҙөлеш осоронда ҡала халҡы ҡайһы бер ҡыйынлыҡтар менән килешергә мәжбүр була. Кешеләрҙең күбеһе быны аңлап ҡабул итә. Ләкин ваҡытлыса ауырлыҡтар менән килешергә әҙер булмағандар ҙа осрай.

**Тиҙҙән баш ҡалабыҙ юбилейына арналған матур байрам уҙғаласаҡ. Байрам ҙурҙарҙан-ҙур булмаҡсы. Уның майҙаны киң. Барса урындарға ла барып булмай бит. Һеҙ, хөрмәтле Ратмир Рафил улы, шәхсән Өфө кешеләренә ҡайһы урындарға килергә тәҡдим итер инегеҙ?**

- Байрам тантаналары Өфөнөң һәр районында үтәсәк. Һәр кем күңеленә хуш килгән сараны һайлап алырына шигебеҙ юҡ. "Өфө яңырай", "Евразия йөрәге", "АйДа Фест", "Өфө: батырлыҡ һәм дан дәүере" фестивалдәре, "Өфө ҡалаһы сәнәғәте потенциалы" күргәҙмәһе, Рәсәй һәм Башҡортостан йондоҙҙары ҡатнашлығындағы киске концерт программалары - барыһы ла ҡыҙыҡлы һәм иҫтә ҡалырлыҡ буласаҡ. Киләсәк быуынға "Ваҡыт капсулаһы" һалыныуы - 50 йылға бер генә була торған сара. Унда ла бармай ҡалыу ярамаҫ.

## Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Шифалы юшан

Шифалы юшан (вероника лекарственная) - тамыры үрмәләп үҫеүсе үлән. Япраҡтары бер-берeһенә ҡаршы урынлашҡан, йомортҡаға оҡшаш формала. Сәскәһе ваҡ, сағыу зәңгәр төҫтә, тәлгәшкә йыйылған. Июнь-август сәскә ата. Үләндә дуплау матдәләре, әсе тәм, эфир майы, ыҫмала, гликозидтар, С витамины, каротин һәм аҙ генә алколоидтар бар. Дауаланыуҙа август айында йыйылған һабағын, япрағын, сәскәһен ҡулланалар. Шифалы юшан һыҙланыуҙы баҫа, микробтарға һәм көҙән йыйырыуға ҡаршы, ҡанды туҡтатыусы көскә эйә.

❖ Артриттан 4-әр өлөш юшан үләнен, аҡтамыр тамыры, эт дегәнәге (череда) үләне, 6 өлөш ала миләүшә (фиалка трехцветная), 5 өлөш дегәнәк тамырын бергә ҡушырға. Әҙерләмәнән 1 ҡалағына 1 стакан һыу ҡойоп, һыу парында 15 минут ҡайнатырға һәм һөҙөргә. Көнөнә 3-әр стакан эсергә.

❖ Тиренең бәшмәк ауырыуҙарына ҡаршы юшан үләненең бер стакан һутына 1 стакан 90 процентлы спирт ҡушырға һәм 10 көн төнәтергә. Ауырыу урындарға һөртергә. Шулай уҡ бөтөн үләндән һығылған һутты эсергә була: 2 балғалаҡ юшан һутына 2 балғалаҡ кәзә һөтө ҡушып, көн һайын көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан алда ҡабул итергә.

❖ Ашағы килмәгәндә 1 ҡалаҡ киптерелгән шифалы юшан үләненә 2 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 2 сәғәт төнәтергә, һөҙөргә. Көнөнә 4 тапҡыр, ашағандан һуң 1 сәғәт үткәс, 1/2 стакан эсергә.

### Әнис

❖ Аппетит түбәнәйгәндә 1 балғалаҡ ваҡланған әнис орлоғона 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, төнәтергә һәм һыуытып, ашарҙан 30 минут алда яртышар стакан эсергә.

❖ Шулай уҡ аппетит булмағанда 40 грамм әнис орлоғон, 1 грамм дәрсен, 0,5 кг шәкәр, 1 литр һыуҙы ҡушып болғарға. Алты аҙна төнәтеп һөҙөргә. Төнәтмәнән 1-әр ҡалағын ашағандан һуң эсергә.

**Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.**

**✓ Ғәрәп кешеһе Өфөбеҙгә өс тапҡыр килеп китте. Килгән һайын маҡтап китә: был ҡалала иң бәхетле кешеләр йәшәй, үҙегеҙ генә һиҙмәйһегеҙ шуны, ти. Ана шул бәхетебеҙҙең ҡәҙерен беләйек.**



ЗИҺЕН КИҢӘЙТЕП...



# КӨНЬЯҠ УРАЛ ҠОШТАРЫ

**Һоро торна**

**(Серый журавль)**



Оҙон аяҡлы һәм муйынлы был эре ҡоштар торналар ғаиләһенә ҡарай. Суҡыштары оҙон, осҡан саҡта муйындарын һуҙып осалар, ошоноң менән селәндән айырылып тора. Был ғаиләгә ҡараған ҡоштарҙың Башҡортостанда 2 төрө осрай, әммә һоро торна ғына оя ҡороп, бала сығара. Исеме әйтеп тороуынса, һоро төҫтә, баш түбәһендә ҡыҙарып тиреһе күренеп тора. Күҙе эргәһендә, соңҡаһында муйынға төшөп торған аҡ табы бар. Муйынының аҫҡы яғы ҡояш яҡтыһында аҡ булып күренһә лә, ул һоро. Йәш ҡоштарҙың ҡаурыйҙары ерәнерәк. Кәүҙә оҙонлоғо 114-140 см, йәйелгән ҡанатының киңлеге 200-230 см-ға етә. Уның тауышын һәр кем ишеткәне барҙыр. Ҡош түйы мәлендә инә менән ата ҡоштоң тауышы бигерәк сағыу ишетелә.

Евразияның урманлы, урманлы-дала зонаһында йәшәй. Башҡортостанда Шиңгәккүлдә һәм Берғаҙан ҡамыш һаҙлығында элегерәк күпләп осраған. Бөгөнгө көндә ул һирәк осрай торған ҡош.

Яҙын ҡар ирей башлаған уҡ ҡайта, был март аҙаҡтарына тура килә. Һаҙмат урындарҙа оя ҡора, сөнки был урындарҙа мал да, кеше лә һирәк йөрөй. Парҙар бер-береһенән 1 км араһында оя ҡора. Инә торна күберәк 2 йомортҡа һала һәм уны икәүләп сиратлап баҫып сығаралар. Йомортҡаларҙың иҫәбе ҡайһы саҡта 1 йәки 3 булыуы ихтимал. Һоро торналар был осорҙа бик һаҡ ҡылана, ҡурҡыныс янағанда ояны ташлап китеп торалар һәм аҙаҡтан кире әйләнеп ҡайталар. Бәпкәләр 3-4 көн ояла йәшәгәндән һуң, ата-инәһенә эйәреп, һаҙлыҡ буйлап йөрөй башлай. Тәүге көндән уҡ ризыҡты үҙҙәре таба, шулай ҙа оло ҡоштар уларҙы ашата. 10 аҙналыҡ бәпкә оса ала.

Башлыса үҫемлек менән туҡлана, шулай уҡ тәлмәрйен, бөжәктәр, кимереүселәр, ҡоштарҙың йомортҡаһын һәм бәпкәләрен дә ашай. Һай аҡҡан урында балыҡ та тота, суҡышы менән селәүсен дә соҡой. Июль урталарынан баҫыуҙарға оса башлай, бигерәк тә борсаҡты ярата.

Көҙөн йылы яҡҡа осор алдынан 100 баш ҡош бергә туплана, август аҙаҡтары, сентябрь башында осоп китә. Иран, Һиндостандың көнбайышында ҡышлай. Һоро торна Башҡортостандың Ҡыҙыл китабына ингән.

**М. Баянов, Ә. Мәмәтов,**
**"Көньяҡ Урал ҡоштары" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

БАШ ҠАЛАМ

# ҠӘҘЕРЕН БЕЛӘЙЕК!

**Үҙ ғүмеремдә бик күп ерҙәр гиҙҙем, Европа, Азия илдәрен айҡап сығып, ҙур-ҙур ҡалаларына һоҡландым. Рәсәйҙе лә иңләп-буйланым: Дондағы Ростовта уҡыһам, Себерҙә, Нижневартовскиҙа байтаҡ йылдар йәшәнем, ләкин бер ерҙә лә Өфөбеҙ кеүек матур, яҡты, уңайлы башҡа ҡаланы тапманым. Быны мин архитектор булараҡ та, патриот булараҡ та әйтәм.**

Әлбиттә, Өфөнө Лондон, Мадрид кеүек ҡалалар менән сағыштырып булмай, бының кәрәге лә юҡ. Хәҙер архитектурала, ғөмүмән, заманса һәм уңайлы булған бөләкәй ҡалалар тәҙөүгә йөҙ тотола, сөнки ҙур ҡалаларҙың проблемалары ла ҙур. Мәҫәлән, алыҫтан эҙләргә түгел, Мәскәүҙәге юл-транспорт мәсьәләләре унда йәшәп ҡарамаған кешегә лә яҡшы билдәле: аэропортҡа барып-ҡайтыуға ғына ла кеше 4-6 сәғәт ваҡытын сарыф итә. Был йәһәттән Өфөлә лә бар ундай мәсьәлә, тик уны хәл итеү буйынса мөһим саралар үҙенә юл ярып китә алмай, үкенескә күрә. Тиҙ йөрөшлө трамвай юлдарын төҙөү буйынса проект бик отошло булмаҫсы ине, юғиһә. Уны туҡтатыу сәбәптәре бик аңлашылып етмәне шулай ҙа... Ер өҫтө метроһын төҙөү ҙә транспорт тығындары мәсьәләһен йырып ебәрер ине. Ындай саралар айырым кешеләр мәнфәғәтенә бәйле булырға тейеш түгел, ул халыҡҡа уңайлы булһын өсөн уйланыла бит. Шулай булғас, уны бойомға ашырыу юлдарында ныҡышмалылыҡ күрһәтергә лә кәрәктер, тип уйлайым.

Өйөндәге хәлде күршеңдән һора, тигән әйтем бар бит беҙҙә. Үҙебеҙ ғүмер буйы ошонда йәшәгәс, күреп, аңлап та бөтмәйбеҙҙер, ихтимал. Ә бына ситтән килгән дуҫтар, таныштарҙан Өфө тураһында фәҡәт яҡшы фекерҙәр, баш ҡалабыҙ менән һоҡланыуҙар ғына ишетергә тура килә. Әлхәмдулиллаһ, ике тапҡыр хажға барырға насип булды, беҙҙең төркөм етәксеһе - ғәрәп кешеһе Өфөбеҙгә өс тапҡыр килеп китте. Килгән һайын маҡтап китә: был ҡалала иң бәхетле кешеләр йәшәй, үҙегеҙ генә һиҙмәйһегеҙ шуны, ти. Ана шул бәхетебеҙҙең ҡәҙерен беләйек, ҡалабыҙҙы - төп йортобоҙҙо, уның матурлығын һаҡлайыҡ.

**Гүзәл ЯУБАҪАРОВА,**
**"АС-Проект" проектлау институты"**
**яуаплылығы сикләнгән ойошма директоры.**

ГЕОГРАФ ҺҮҘЕ

# ӨФӨ БЕЙЕК ТАУҘАРҘА



**Һүҙебеҙҙе географтарса башлаһаҡ, Октябрь проспектындағы Өфө ҡала советы микрорайонын ҡаланың уртаһы, үҙәге тип алһаҡ, был урындың географик координаттары шундай булып сыға: был - көнсығыш оҙонлоҡтоң 56 градусы, төньяҡ киңлектең 54 градусы 45 минуты. Йәғни Өфө ҡалаһы Лондон эргәһендәге Гринвич меридианынан 56 градусҡа көнсығыштараҡ, ә экваторҙан 54 градус 45 минут төньяҡтараҡ ята. Төндә Тимерҡаҙыҡ йондоҙо горизонттан 54 градус 45 минутҡа юғарыраҡ булып күренә, тип аңларға мөмкин һуңғыһын.**

Географик параллелдәр буйлап һанаһаң, Мәскәү беҙҙән 1150 километрға, йәғни 18 градусҡа көнбайыштараҡ ятҡан булып сыға. Ҡояш өсөн был - 1 сәғәт 15 минутлыҡ юл (Ҡояш беҙҙе уратып йөрөй тип ҡарағанда). Әммә Мәскәү ваҡыты менән Өфө ваҡыты араһындағы айырма шартлы рәүештә теүәл ике сәғәт тип алынған, шулай ҡулайлыраҡ. Ә географик меридиандар буйлап иҫәпләһәң, Мәскәү беҙҙән 120 километрға төньяҡтараҡ ята булып сыға. Тимерҡаҙыҡ йондоҙо Мәскәүҙә беҙҙәгегә ҡарағанда тик 1 градусҡа ғына юғарыраҡ булып күренә.

Өфө менән Мәскәүҙең географик киңлектәре араһында айырма бик аҙ булһа ла, һауа торошо беҙҙә күпкә ҡатыраҡ, сөнки беҙ Атлантик океандан алыҫыраҡбыҙ. Ғинуарҙың уртаса температураһы беҙҙә минус 15, Мәскәүҙә - минус 10, июлдеке беҙҙә лә, тегендә лә плюс 18 градус тирәһе. Әммә дөйөм алғанда зарлана торған юҡ.

Яуым-төшөм яғынан беҙгә ҡыуанып ҡына йәшәргә ҡала. Йыллыҡ яуым-төшөм кимәле 400-600 миллиметр, ҡышҡы ҡар ҡатламы уртаса 80-100 сантиметр булып тора. Еребеҙ - ҡара тупраҡ. Йәнлектәр, үҫемлектәр донъяһына ла шөкөр итәһе генә ҡала. Һыуға мохтажлыҡ юҡ. Ағиҙел, Ҡариҙел йылғаларының әһәмиәте - әйтеп бөткөһөҙ. Ер аҫты һыуҙарының запастары бик күп. Тәрәндәге тау-таш ҡатламдары тотош тип әйтерлек эҙбизташтан тора, ә был таш, билдәле булыуынса, үҙенең эсендә бик күп һыу тотоп тора ала, төрлө хужалыҡ тармаҡтарында үҙе лә күпләп ҡулланыла.

"Өфө ҡайҙа, Өфө ҡайҙа? Өфө бейек тауҙарҙа" тигән йырҙы иҫкә төшөрөп, ҡалабыҙ ултырған биләмәнең рельефы, тауҙары тураһында, тауҙарҙың бейеклеген метрҙарға күсереп, айырым һөйләп үтәйек әле бер аҙ.

Ҡалабыҙ тирәһендә Ағиҙел йылғаһының кимәле алыҫтағы диңгеҙҙәр кимәленән 82-83 метрға бейегерәк ята. Ә бейек тә бейек тип йырлаған тауҙарыбыҙҙың бейеклеге, ошо уҡ кимәлдән һанағанда, 203-205 метрға етә, йәғни Ағиҙелдең өҫтөнән 120 метрға күтәрелеп тора. Ындай урындарҙың иң ҙур массивы тип, бая ҡалабыҙҙың үҙәге, уртаһы тип әйтеп үткән ҡала Советы микрорайонын күрһәтеп үтергә кәрәк. Тик был урын бейек булып күренмәй, дөрөҫөрәге, бындағы бейеклек үтеп-һүтеп йөрөгән халыҡҡа һиҙелмәй ҡала, сөнки яҡынтирәһендәге юлдарҙа текә урындар юҡ.

Шулай. Ләкин бөтә был һандар, үлсәмдәр "Өфө бейек тауҙарҙа" тигән йыр һүҙҙәренең бәсен төшөрә алмай.

Бөтә яҡтан да тип әйтерлек йылғалар менән уратып алынған Өфө ҡалаһына - Имәнҡалаға - боронғо заманда беҙҙең ата-бабалар нисек үтеп инер булған? Ҡышҡыһын - боҙ аша, ә йәйгеһен - кәмә, паром, хатта бер-береһенә бәйле бүрәнәләр ярҙамында. Ҡала тау башында һәрәйеп ултырыр булған улар өсөн. Бына һиңә - "Өфө бейек тауҙарҙа".

Шуны ла онотмайыҡ, текә булған һайын тау бейек тойола. Өфөгә көньяҡтан килеп, Ағиҙел аша ҡарап тор әле! Элек тә, хәҙер ҙә һоҡландырғыс был күренеш! Бөйөк Салауаттың бөйөк һәйкәле ниндәй шәп урын тапҡан бында үҙенә! Шағирҙарыбыҙ өсөн дә бик елле образға әйләнде һәйкәлдең урыны, бындағы ҡая таш, текә тау...

**Басир МӘҺӘҘИЕВ,**
**география фәндәре докторы.**

**Редакциянан: 2002 йылдың 6 ноябрендә сыға башлаған "Киске Өфө" гәзитенең 1-се һанына йүгертеп килтереп биргәйне Басир Дәүләт улы ошо мәҡәләһен. "Баш ҡаланың башҡорт телендәге гәзитен башлап ҡулына алыусылар иң тәүҙә Өфөнөң географик яҡтан ҡайҙа урынлашҡанын белергә тейеш", тигәйне. Ағайыбыҙ артабан да, баҡыйлыҡҡа күскәнгә тиклем дә, редакциябыҙға инеп, төрлө мәғлүмәттәр, матур кәңәштәрен бирә йөрөнө. Был һанда уның ошо 22 йыл элек яҙылған мәҡәләһен ҡабатлап бирергә булдыҡ.**

**✓ Ырымбур линияһын һаҡлар өсөн кордон һағауылдары булдырыла, улар күбеһенсә башҡорттарҙан, Ставрополь ҡалмыҡтарынан һәм казактарҙан тора, әммә ҡырғыҙҙарҙы тик эске яҡтан ғына эҙәрлекләү хаҡында ҡарар сығарыла.**

ТАРИХИ ХӘҠИҠӘТ

# ЫРЫМБУР ГУБЕРНАТОРҘАРЫ ҺӘМ БАШҠОРТТАР

## (Генерал-майор И.В. Чернов яҙмаларынан)



**П.К. Эссен**

**(1817 - 1830 йылдарҙа губернатор булған).**

Үтәүевтан һуң оҙаҡ ҡына ваҡыт Папейка шайкаһы булды, ул типтәр полкынан ҡасҡан унтер-офицер ине; ошо шайка ни теләһә, шуны ҡылды, йәғни талау, үлтереү һәм һәр төрлө көсләүҙән тартынманы. Папейка үҙе сауҙагәр кейемендә асыҡ-тан-асыҡ баҙарҙарға килеп йөрөнө. Башҡорттар уны белһәләр ҙә, ҡайҙа булғанын күрһәтеү тураһында уйлап та ҡараманы һәм уны начальство ҡулына тотоп бирмәне. Ул 30-сы йылдарҙа граф Перовский ваҡытында тотола һәм суд ҡарары менән тән язаһына хөкөм ителеп, Себергә һөрөлә.

Бер аҙ ваҡыт үтеүгә шундай уҡ ҡыйыу башҡорт Байыш (Баишка) пәйҙә була, әммә был 40-сы йылдарға ҡарай, уны Верхнеуральск исправнигы Скарятинов тота, шул саҡта ул бер нисә мылтыҡ пуляһынан яралана һәм шуның өсөн 4-се дәрәжәләге изге Владимир ордены менән бүләкләнә.

Юлбасарҙарҙың бөләкәй партияларына бер кем дә иғтибар итмәй ине, һәм генерал Обручев 1842, йә иһә 1843 йылда Ырымбур казактарын хатта Стәрлетамаҡ янына килеп кеше талап йөрөгән ҡурҡыу белмәҫ батырҙарҙы эҙәрлекләргә ебәрә. Әммә был сара хупланмай һәм генерал ошо айҡанлы киҫәтеү ала, сөнки уға тиклем хәрби командалар бындай осраҡтарҙа ҡулланылмай, һәм ул яман кешеләрҙе урындағы халыҡ тарафынан эҙәрлекләү менән сикләнелергә ҡушыла.

Ҡырғыҙ (ҡазаҡ. - **Тәрж. иҫк.**) далаларында барымта, малдарҙы ҡыуып алып китеү һәм каруандарҙы талау ҡәҙимге бер күренеш ине. Уларға ҡаршы полковниктар Щеглов, Циолковский һәм башҡалар етәкселегендә хәрби командалар ебәрелә, әммә улар отрядтарға тап булған ҡырғыҙ ауылдарын туҙҙырыуҙан һәм малдарын ҡыуып алып ҡайтыуҙан ары китмәй. Батыҙар һәм егеттәр ҡасып китеп өлгөрә һәм икенсе урында үҙ эштәрен яңынан дауам итә.

Рус кешеләре линияның барса урындарында һәм Каспий диңгеҙе буйына барыусылар (башлыса, крәҫтиәндәр) ҡырғыҙҙар (ҡазаҡтар. - **Тәрж. иҫк**) тарафынан күпләп әсиргә алып кителә һәм Хивала, Бохарала ҡоллоҡҡа һатыла. Ырымбур ғәскәре командующийы адъютанты, есаул Падуров та иҫ киткән әсирҙәрҙән була, ул Татищев и Переволоцк ҡәлғәләре арауығында хеҙмәт эштәре менән йөрөгән сағында әсиргә алына. Эссен идара иткән ваҡытта Бохараға рус тауарҙары каруаны ебәрелә, уны алып барыу Уральск һәм Ырымбур ғәскәре казактары һағы аҫтында Ырымбур сауҙагәре Кандалоҡҡа йөкмәтелә. Каруан Эмбаға барып етеүгә, хивалылар һәм ҡырғыҙҙар өйөрә тарафынан туктатылып, шунда ташлап кителә һәм һуңынан талана, ә ғәскәр линияға ҡайтып китә. Тауарҙарҙы һатып алған ҡаҙна ҙур зыян күрә.

Отрядтың начальнигы полковник Циолковский була, ә ғәскәрҙең кире ҡайтыуының төп сәбәбе - каруан ҡыш көнө юлға сыҡҡанлыҡтан, дөйәләр һәм аттарҙы ашатырлыҡ үлән, һәм ҡәҙимге каруан юлына сыҡҡан кешеләргә етерлек кимәлдә түләр өсөн аҡса булмауында.

Ырымбур линияһын һаҡлар өсөн кордон һағауылдары булдырыла, улар күбеһенсә башҡорттарҙан, Ставрополь ҡалмыҡтарынан һәм казактарҙан тора, әммә шул уҡ ваҡытта ҡырғыҙҙарҙы тик эске яҡтан ғына эҙәрлекләү хаҡында ҡарар сығарыла, эҙәрлекләү маҡсатында Урал йылғаһы аша сығыу ҡәтғи тыйыла, ә һуңынан быны дала эсенә бары тик 5 саҡрым арауығына үтеп инеп эшләү рөхсәт ителә. Беренсе осраҡта малдарҙы ҡыуып алып китеүсе һәм кешеләрҙе әсиргә алыусы ҡырғыҙҙар йылға аръяғына сығыу менән тынысланып, туҡталып ҡала, сөнки улар үҙҙәренең артынан ҡыуып килеүселәр булмауына инана, ә икенсе осраҡта - эҙәрлекләп килеүселәрҙе яҡындағы ауылдарҙа йәшәгән, барымтала ҡатнашмаған ҡырғыҙҙар тотоп алып, уларҙы тыныс йәшәгән кешеләрҙе таларға килгән бурҙар итеп күрһәтеп, ҡәлғәләрҙең комендантларына килтерә. Күрәһең, үҙҙәренең урланған мөлкәте артынан барыусы, уны үҙ торлаҡтарына ҡырғыҙҙарҙы үткәрмәйенсә һаҡлап тороусы ҡыйыу кешеләрҙең начальниктар тарафынан язаға тарттырылған осраҡтары ла булғандыр.

20-се йылдарҙа Волга буйы губерналарында - Һарытауҙа һәм Семберҙә, һәм Волга аръяғында уларға йәнәш ятҡан урындарҙа далала, Һыр-Даръя яҡтарында үтә ныҡ ындырышлы ерҙәр булыуы хаҡында имеш-мимештәр таралып китеп, халыҡ фекеренсә, ошо йылғаның һыуы һөт кеүек икәне, ярҙары көҫәлдән торғандай күрһәтелеүе, ә балыҡты йылғанан ҡул менән дә тотоп алып булыуы хаҡында һөйләнелә: һөтлө көҫәл ашар өсөн ҡалаҡтарың ғына булһын; унда бер ниндәй барщина юҡ, ә батшанан, йәнәһе, Һыр-Даръяға күсеп китергә һәм унда йәшәргә теләүсе барса кешеләргә рөхсәт бар икән.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ тәржемәһе. (Дауамы бар).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 79



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

### Көнсығыш Померания һөжүм итеү операцияһында

15 февралдә Райхенбах ауылы янындағы алышта 60-сы гв. атлы полкының орудие командиры, гв. старшинаһы, быға тиклем ике тапҡыр "Батырлыҡ өсөн" миҙалы менән бүләкләнгән Григорий Велисов (Төркмән ССР-ның Байрамғәли ҡалаһынан) тиңһеҙ ҡаһарманлыҡ өлгөһөн күрһәтә. Гв. старшинаһы орудие расчетынан бер үҙе генә тере ҡала. Уның орудиеһына немецтарҙың 4 танкыһы яҡынлаша. Беренсе атыуҙарҙан уҡ уларҙың икеһе сафтан сыға. Әммә танкылар артынан автоматсылар тейәлгән бронетранспортерҙар ҙа пәйҙә була. Велисов уларға ла ут аса һәм ике машинаны емертә. Әммә снарядтар ҙа ҡалмай. Немец автоматсылары батыр яугирҙы уратып ала, ә ул үҙенә яҡынлашҡан бер нисә дошман һалдатын пистолетынан атып йыға. Уны наградаға тәҡдим итеү документында ошолай яҙылған: "Дошман пуляһы Ватан патриотының ғүмерен өҙҙө. Немец танкыһы уның кәүҙәһен һәм орудиеһын ике тапҡыр тапап уҙа". Г.Н. Велисовҡа Советтар Союзы Геройы исеме 1945 йылдың 31 майындағы Указға ярашлы бирелә.

Шул уҡ Райхенбах ауылы янында 60-сы гв. атлы полкының 4-се эскадронында пулемет расчеты командиры булып хеҙмәт иткән гв. өлкән сержанты Карпов Михаил һөжүмгә күскән дошман һалдаттарына батырҙарса ҡаршы тора. Уның наград документында бына ниндәй мәғлүмәт теркәлгән: 1945 йылдың 15 февралендә дошман тиҫтәләрсә танкылары һәм бронетранспортерҙары менән ҡамауҙа ҡалған төркөмгә ярҙам итер өсөн Арнсвальде ҡалаһы районына бәреп инергә ынтыла. Дошмандың ҡыҫымы арта бара. М.П. Карпов үҙенең станковый пулеметы менән эскадрон флангыһы яғынан, дошман пехотаһы килгән араулыҡта оборона тота. Был яҡтан немецтарҙың ике ротанан ашыу автоматсылары яҡынлашып килә. Карпов, арттағы позицияларға йүнәлгән подразделениеләрҙы пулемет уты менән ҡаплап тороп, дошман автоматсыларын туҡтата. Әммә немецтар алышҡа яңынан-яңы көстәрен индереп тора. Карпов 7 пулемет лентаһын атып бөтөрә. Пулемет патрондары ҡалмағас, автоматынан атыуҙы дауам итә. Уның пулемет позицияһына немецтарҙың ике бронетранспортеры ебәрелә, Карпов ауыр яралана, пулеметы ла сафтан сығарыла. Әммә ҡурҡыу белмәҫ пулеметсы дошман һалдаттары уты аҫтынан ситкәрәк китеп өлгөрә. Ике ҡулы һәм күкрәге яраланған Карпов төнөн үҙ подразделениеһына барып етә. Ошо тиңһеҙ алышта ул дошмандың 200-гә тиклем һалдатын юҡ итә. Ул да СССР Юғары Советы Президиумының 1945 йылдың 31 майындағы Указы менән Советтар Союзы Геройы исеменә лайыҡ була.

15 февралдә, көндөң икенсе яртыһында, һуғыш яланына 62-се гв. атлы полкы һәм танкыға ҡаршы артполк килеп етә. Улар Петтин тораҡ пунктын ала һәм бында дошмандың барса атакаларын кире ҡағыуға өлгәшә. Ошо көндәге бәрелештәрҙә немецтарҙың 8 танкыһы, 6 бронетранспортеры емертелә, 300-ҙән артыҡ һалдаты һәм офицеры юҡ ителә. Әммә дошман командованиеһы нисек итеп булһа ла Арнсвальдела ҡамауҙа ҡалған гарнизонын ҡотҡарырға ҡарар итә.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләнә. (Дауамы бар).**

БАШ ҠАЛАМ



# КҮҢЕЛДӘН ЮЙЫЛМАҪ...

**Хәтер даръяһында баш ҡалабыҙ Өфө тураһында матур, иҫтәлекле тәьҫораттар бик күп минең. Шулай ҙа иң сағыу, иң мөһиме - 1990 йылдың 11 октябре, Башҡортостан суверенитеты иғлан ителгән көн.**

Был иҫтәлекле көн күптәр күңелендә тәрән эҙ ҡалдырғандыр, тип уйлайым. Республика яҙмышына битараф булмаған илһөйәрҙәр бөтә район, ҡалаларҙан автобустарға тейәлешеп, 10 октябрь төнөндә юлға сыҡтылар.

Тулҡынланып, борсолоп, ҙур өмөттәр, хыялдар менән баш ҡаланың Аҡ йорто алдындағы майҙанда меңәрләгән халыҡ оло тарихи боролош көтә. Ер-һыу, тыуған халҡыбыҙ яҙмышы хәл ителгән көн ине был.

Ниһайәт, кискә генә БАССР-ҙың һуңғы 3-сө сессияһы тамамланды - республиканың мөстәҡиллеге-суверенитеты тураһында иғлан ителде. Майҙанға йыйылған халыҡ бал ҡорттары күселәй гөж килде. Алҡыштар, шатлыҡлы ауаздар бар Өфөнө күмде. Кемдер йырлай, кемдер илай, тигәндәй... Салауат Юлаев майҙанында төрлө йәштәгеләр бергә хыял, өмөт байрамы үткәрҙе. Бейене, йырланы, киләсәккә пландар ҡорҙо.

Ул көндө һис оноторлоҡ түгел, йөрәктә иң мөһим хәтирә булып һаман йәшәй.

Был йылдар Башҡортостан өсөн бәрәкәтле осор булды - суверенлы республика хоҡуғы яулаған тәүге президент һайланды, яңы конституция раҫланды, үҙәк, сит төбәктәр менән яңыса мөнәсәбәттәр булдырылды.

Халҡыбыҙҙың үҙ асылына ҡайтыу башланғысы ла булды ул: башҡорт милли мәктәптәре, гимназиялар асылыу, тел, мәҙәниәт үҫеше, дингә ҡайтыу осоро башланды. Шулай уҡ социаль-мәҙәни объекттар төҙөлөшөнә, яңы предприятиелар асылыуына нигеҙ һалынды.

Был матур, күңелемдән мәңге юйылмаҫ тарихи ваҡиғалар тураһындағы хәтирәләр ебем һәр ваҡыт мине Өфө менән, гүзәл ҡалам менән бәйләй.

**Фәүзиә ЙӘНТИЛИНА, пенсиялағы уҡытыусы. Мәләүез ҡалаһы.**

✓ *Тап Н. Мәжитов тәүгеләрҙән булып Өфө ярымутрауы территорияһындағы биләмә 1500 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгәнлеген бихисап сығанаҡтар һәм документтар, археологик табыштар менән раҫлай.*

**Беҙҙең гәзит биттәрендә Өфө-II ҡаласығы тарихы тураһында күп яҙылды. Әммә ҡабатлағандан доға иҫкермәй, тиҙәр. Шул ҡараштан сығып, түбәндә Өфө-II ҡаласығы тураһында тарихсы Салауат ХӘМИҘУЛЛИНдың ошо тема буйынса аныҡ мәғлүмәттәр менән дөйөмләштерелгән мәҡәләһен тәҡдим итәбеҙ.**

# ӨФӨ-II ҠАЛАСЫҒЫНА - Быны донъя тарихы ла

## Кем тәүге тикшереүсе?

2006 йылда Өфөнөң боронғо өлөшөндә тәү ҡарашҡа ғәҙәти булмаған ҡаҙыныу эштәре башланды. Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамдары араһындағы кварталды реконструкциялау алдынан, законға ярашлы, уны археологтар тикшерҙе. Ябай тикшеренеү сенсацияға килтерҙе: Өфөнөң йәше бығатиклем иҫәпләнеп йөрөлгәндән өс тапҡырға олораҡ икән: уға 1500 йыл!

Өфө-II ҡаласығын тәү тапҡыр 1956 йылда ошо территорияға беренсе шурфтар һалыусы Петр Ищериков асҡан, тип иҫәпләнә. Пробалы ҡаҙыныу эштәрендә ул ваҡытта әле совтың эксперт билдәләмәһе баһалап бөткөһөҙ әһәмиәткә эйә булды: "Монументаллегеһәм туҡтауһыҙ йәшәү ваҡыты буйынса ҡаласыҡтың бөтөн Көнсығыш Европала тиңе юҡ", - тине ул. Шунда уҡ уҫал теллеләр, Өфөнө 1000 йыллығын билдәләгән Ҡаҙандан күреп "картайттылар", тип раҫлай башланы. Был, ысынлап та, шулаймы икәнлеген асыҡлап ҡарайыҡ.

## Боронғо Өфө тураһында батшалар ҙа, ғалимдар ҙа һөйләгән

1669 йылда батша Алексей Михайлович Өфөгә рус кешеләре килеп, боронғо ҡәбертәре 1735-1740 йылдарҙағы ихтилал ваҡытында юғалған башҡорттарҙың йылъяҙмаһы мәғлүмәттәренә нигеҙләнә.

Башҡортостандың боронғолоғон күнел биреп тикшереүсе, Өфө ҡалаһының башлығы Дмитрий Волков (1875 - 1887 йылдарҙа башлыҡ була) "Өфө губерна ведомстволары"нда: "Беҙ, нигеҙҙә, ҡала ситендә өнһөҙ ҡурғандар: күптән юғалған халыҡтарҙың һәйкәлен - күптән инде тынған көрәш шаһиттарын күрәбеҙ. Йылғалар араһындағы һәм хәҙер Өфө иркен йәйелгән барлыҡ киң майҙан кеше һөйәктәре менән тулған баҫыуҙы хәтерләтә: ҡайҙа ғына күрәк тыҡма, һәр ерҙә һөлдәләр һәм һөйәктәр... Был - кеше һөйәктәре менән ашландырылған Аллаһ яланы бында ҡасандыр оҙаҡ һәм ҡаты алыш булыуын, күп кешеләр ыҙаланыуын һәм үлеүен асыҡ һөйләй", - тип яҙа.

Случевск тауынан башланып (хәҙерге С. Юлаев скверы) телеүҙәккә тиклемге терлеп аяҡ баҫҡан сит ил кешеләрен үлтерәләр, шуға берәү ҙә килергә атлығып тормай. Ике ҡала ла Атил йылғаһына ҡойған йылға буйында урынлашҡан..." - тип яҙа.

Иҙрисиҙең картаһында Атил йылғаһы (йәғни Иҙел йәки Волга) Урал тауҙарынан ағып сыға, ә Касра һәм Масра ҡалалары унын уң яҡ ҡушылдығы ярында урынлашҡан. Әш шунда: боронғо грек географы Клавдий Птоломей заманынан Волганың башы тип Ағиҙел йылғаһы иҫәпләнгән. Тимәк, Ағиҙелдең уң ҡушылдығы - Ҡариҙел була.

"Әске башҡорттар"ҙан тыш, Иҙриси "тышҡы башҡорттар"ҙың өс ҡалаһын иҫкә ала: "Тышҡы башҡорттар"ға килгәндә, улар араһында Ҡараҡая, Намджан һәм Гурхан бар. Улар халҡы күп булған һәм үҙҙәрен-үҙҙәре тәьмин иткән ҡалалар. Уларҙа сауҙа һәм һөнәрселек ныҡ үҫешкән. Уларҙың ҡайһы берҙәре башҡаларҙың ерҙәренә килеп, үҙҙәренә кәрәкле нәмәләрҙе ала. Был аталған йылға ярында урынлашҡан. Ҡаланан көнсығышҡа табан Арджика тауы урынлашҡан, унда мендәрсә кеше эшләгән баҡыр копиҙары (рудник йәки карьер - **Ред.**) бар..."

## Намджан - сауҙагәрҙәр һәм металлургтар ҡалаһы

Үкенескә күрә, Намджан картала билдәләнмәгән. Һәм ҡайҙа урынлашыуы тураһында текста яҙылыуы буйынса ул Өфөгә тап килмәй. Әммә уның тураһындағы мәғлүмәт шуныһы менән ҡыҙыҡлы: ул Урта быуат дәүерендәге көньяҡ Урал ҡалаһының тибын һүрәтләй. Намджандың Урал йылғаһы бассейнында урынлашыуы ихтимал. Иҙриси был ҡала тураһында башҡа мәғлүмәттәр ҙә килтерә: "Унда бик күп баҡыр табалар, уны Шаш иленең Хорезм һәм башҡа ҡалаларына һәм күрше гуздар иленә оҙаталар..." Шаш - ул Ташкент, Хорезм - Амударьягенә Пермь университетын тамамлап ҡайтҡан йәш ғалим Нияз Мәжитов та ҡатнаша. Ул үҙенең йондоҙло сәғәтен 50 йыл көтә һәм көтөп ала - тап ярты быуаттан һуң ғына Зәки Вәлиди һәм Пушкин урамындағы кварталдарҙы реконструкциялау башлана. Тап Башҡорт дәүләт университетының профессоры һәм академик Н. Мәжитов тәүгеләрҙән булып иртә мәҙәни ҡатламдар V быуат менән билдәләнә, тип белдерә, йәғни Өфө ярымутрауы территорияһындағы биләмә 1500 йыл самаһы элек барлыҡҡа килгәнлеген бихисап сығанаҡтар һәм документтар, археологик табыштар менән раҫлай. Бигерәк тә Мәскәү белгестәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының урта быуат археологияһы төркөмө мөдире Игорь Кызлалектәрҙән "алтын һәм көмөш әйберҙәр һәм һауыт-һаба ҡаҙып алыуға" борсолоуын белдерә. XVIII быуаттың 30-сы йылдарында Ырымбур экспедицияһының секретары булған рус ғалимы Петр Рычков бик күп билдәле башҡорттар менән һөйләшә. Ҡара-Табын олоҫо старшинаһы Ҡыҙрас Муллаҡаевтың: "Ҡаҙан ханлығының һәм башҡорттарҙың Рәсәй скипетрына буйһонғанға тиклем күп йылдар әүәл хәҙерге Өфө ҡалаһы урынында Ағиҙел йылғаһынан үргә табан Ҡариҙел йылғаһының башына һәм йылға яры буйлап урынлашҡан тауҙарға тиклем оҙонлоғо 10 саҡрымға һуҙылған бөйөк ҡала булған", - тигән һүҙҙәрен үҙенең "Ырымбур топографияһы"нда теркәп ҡалдыра. Рычков күрһәтеүенсә, Муллаҡаевтың мәғлүмәтритория тотошлайы ҡәберҙәрҙән тора. Биналар төҙөгәндә төҙөүселәр Өфө байҙарының бай ҡәберлектәренә тап була. Бихисап алтын һәм көмөш биҙәнеү әйберҙәре, һауыт-һаба, башҡа предметтар табыла, уларҙың күп өлөшө юғалып бөтә, бары тик ҙур булмаған бер өлөшө генә Милли музейҙа һаҡлана.

## Боронғо башҡорттарҙың баш ҡалаһы ул

Башҡортостандың Урта быуат ҡалалары тураһында үҙенең яҙмаларында XII быуаттың ғәрәп географы Мөхәммәд әл-Иҙриси: "...Әске башҡорттарҙың ҡалалары араһында Масра һәм Касра бар. Ике ҡала ла ҙур түгел, һәм сауҙагәрҙәр унда һирәк була. Унда ерҙәренә һәм илдәренә киундырышлы ил, унда үлән дә, мал да күп..."

Атап үтелгән ҡалаларҙың ҡайһыһы Өфөгә тап килеүе билдәһеҙ. Иң мөһиме, был яҙмалар Өфө-II ҡаласығын ҡаҙығанда яһалған асыштарҙы раҫлай: бында ҡара һәм төҫлө металлургия эҙҙәре табыла. Ҡаласыҡта боронғо мейес эҙҙәре, бронза ҡойолмалары, шулай уҡ металл иретеү һауыттары табыла. Боронғо башҡорт ҡалаларында металлургияның киң үҫешеүе әл-Иҙрисиҙең яҙмаларына тап килә: "...Намджан - ҡала ҡоролошо булған бәләкәй генә ҡала, унын менән төрки ҡәбиләһенән булған ир кеше етәкселек итә. Был ҡала Сукан тип ның түбәнге тамағы, гуздар хәҙерге Ҡаҙағстан территорияһында йәшәгән. Табылған баҡыр каруан юлы менән Урта Азия илдәренә ебәрелгән. Каталон атласының карталарының береһендә билдәләнеүенсә, башҡорттарҙың каруан сауҙаһының бер маршруты ҡайҙалыр көнсығышҡа китә. Иҙриси был турала бына нимә тип яҙа: "...Был ҡаланан шулай уҡ йылға буйлап әл-Хәзәр диңгеҙенә төлкө һәм ҡондоҙ тиреһен сығаралар, уларҙы әл-Хәзәр диңгеҙе яры буйында һәм Дейлемда юғары хаҡҡа һаталар..."

Телгә алынған әл-Хәзәр диңгеҙе - Каспий, ә Дейлем өлкәһе хәҙерге Ирандағы Кас-





***✓ Пашкерти тағы ла аныҡыраҡ итеп Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай.***

# 1500 ЙЫЛ таный

пий буйындағы Мазендаран провинцияһы. Шулай итеп, Намджан сауҙагәрҙәре Каспий диңгеҙен кисеп сығып, уның көньяҡ ярына барып еткән. Артабан Иҙриси Намджан халҡының диңгеҙ сауҙаһы тураһында мәғлүмәттәр килтереп, уның географик урыны тураһында бер шик тә ҡалдырмай: "Был ҡалала шулай уҡ балсыҡтан яһалған әйберҙәр һәм оҙаҡ хеҙмәт итеүсе, юғары сифатлы көршәктәр эшләйҙәр. Был йылға ярҙарында төрлө аҫыл таштар, лазурит, шулай уҡ был йылғала төрлө балыҡтар бар. Унда яҙып та, һөйләп тә аңлатып булмаған ҙур балыҡтар йәшәй. Намджан ҡалаһы халҡы төрлө хәйләләр менән уларҙы еңел генә тота ала. Уларҙы күп итеп тотоп, шуның менән йәшәйҙәр, күп өлөшөн тоҙлайҙар һәм һуңынан Хазар диңгеҙенә сығасаҡ караптарына килтерәләр. Улар ошо диңгеҙҙән яр буйлап баралар һәм Итиль ҡалаһына эләгәләр, унда балыҡтарын һаталар һәм үҙҙәре лә ашайҙар..."

Текстан күренеүенсә, Намджанда йәшәүселәр "башҡорттарҙан хазарҙарға" йылға юлын үҙләштерә. Урал (Яйыҡ) йылғаһы буйлап аҫҡа судноларҙа төшкәндә улар Каспий диңгеҙенең акваторияһына сыға. Һуңынан, уның яры буйлап көнбайыш йүнәлештә хәрәкәт итеп, Волганың дельтаһына барып етеп, йылға буйлап үрләп, Хазарияның баш ҡалаһы Итиль ҡалаһына барып сығалар. Унда улар аҫыл таштар, йәнлек тиреһе һәм тоҙло бикре һата. Иҙрисиҙең тексына һәм картаһына ярашлы, Намджандың Башҡортостандың көньяҡта Эмба йылғаһы һәм Ҡаҙағстан өлкәһенең Мугоджар тауҙарына тиклем йәйрәп ятҡан тарихи территорияһында урынлашҡан булыуын күрәбеҙ. Был ҡаланың Яйыҡ йылғаһы баш алған Арҡайым заманынан алып баҡыр табыу эштәре алып барылған Урал тауҙары эргәһендә урынлашыуында шик булыуы мөмкин түгел. Иҙриси яҙмаларын өйрәнеүсе Ирина Коновалова Намджан ҡалаһын хәҙерге Орск районы тирәһенә урынлаштыра.

### Ҡараҡая ҡалаһы хәҙерге Өфөгә тап килә

Иҙрисиҙең картаһы буйынса, Өфөгә бигерәк тә Ҡараҡая ҡалаһы тап килә. Ул Атил, йәғни Ағиҙел йылғаһына ҡойған, уның уң яҡ ҡушылдығы Ҡариҙелде хәтерләткән урында билдәләнгән. Дөрөҫ, Өфө тип күҙалланған Ҡараҡая ҡалаһы хаталыҡ менән Ағиҙелдең уң яҡ түгел, һул яҡ ярында урынлаштырылған. Бында, әлбиттә, бер ваҡытта ла Башҡортостанда булмаған авторҙы ғәфү итергә мөмкин. Иҙриси: "Караҡая - ағас өйҙәрҙән һәм кейеҙ тирмәләрҙән торған матур ҡала, - тип яҙа. - Булғарҙар уларҙа даими баҫымсылыҡ яһап тора. Уларҙың араһы - 16 аралыҡ һәм улар араһында даими туҡтауһыҙ һуғыш бара..." Әгәр бер көнлөк аралыҡты 40 километр тип алғанда, Ҡараҡая ҡалаһы һәм булғарҙар араһы 640 километр тәшкил итә. Был Өфө менән Татарстандағы хәҙерге Булгар ҡалаһы араһына яҡын. Шулай итеп, Өфө-II археологик ҡомартҡыһы Иҙриси үҙенең яҙмаларында яҙған Ҡараҡая ҡалаһына тап килә, тип раҫларға мөмкин.

XIII быуатта Башҡортостан Алтын Урҙа составына инә. Мәғлүм булыуынса, монгол хандары, ҡағыҙҙа булараҡ, яулап алынған илдәрҙең эске эштәренә ҡыҫылмай, уларҙан бары тик яһаҡ түләүҙе һәм кәрәк булғанда һуғыш алып барыу өсөн ҡоралы ополчение ғына талап итә.

### Башҡорт ҡалаһы: ыңғай һәм кире фекерҙәр

Көнсығыш Европаны берҙәм дәүләткә берләштергән Алтын Урҙа дәүерендә уның территорияһы буйлап сәйәхәт итеү быға тиклем булған быуаттарға ҡарағанда киң тарала. Батый батшалығына бөтөн донъянан сауҙагәрҙәр килә, ә генуэз негоцианттары Урҙала йәнлек тиреһе һәм бик күп сауҙа фактураһы табыуға концессияға эйә була. Күрәһең, тап уларҙың мәғлүмәттәре буйынса 1367 йылда бер туған Пициганиҙарҙың картаһы барлыҡҡа килә. Унда Кама йылғаһынан көньяҡ-көнсығышҡа табан "таҙа яланда" Пашкерти ҡалаһының пунсоны (шартлы билдәһе) күрһәтелә. Ваҡыт үтеү менән уның урынлашыу урыны аныҡлана. 1375 йылға Каталон атласында атап үтелгән ҡала Ағиҙел тип күҙалланған йылғаның һул яҡ ярында күрһәтелә.

Пашкерти тағы ла аныҡыраҡ итеп билдәле фламанд картографы Герард Меркаторҙың картаһында күрһәтелә. Ул тап хәҙерге Өфө - Ағиҙел менән Ҡариҙел ҡушылған ерҙә урынлашҡан. Меркаторҙың атласы 1595 йылда автор вафат булғас донъя күрә. Әммә уға ингән карталар XVI быуаттың 30-70-се йылдарында, йәғни 1586 йылда рус ҡәлғәһе Өфө барлыҡҡа килгәнгә тиклем төҙөлә. Шулай итеп, Меркатор бер нисек тә Пашкертиҙы рус Өфөһө менән бутай алмай.

XIV быуаттың ғәрәп ҡамусыһы Ибн Халдун Алтын Урҙаны һүрәтләп, былай ти: "Үрҙә Сынғыҙхан ошо дәүләткә нигеҙ һалыусы, уның Души-хан (Джучи) исемле улы бар һәм ул батша, тип белдерелгәйне. Был батшалыҡ төньяҡта Хорезмдан Яркенда, Соғда, Һарайға, Маджар, Арран, Сарҙаҡ (Судак), Булғар, Башкурд һәм Джулманға тиклем. Был батшалыҡтың сигендә Ширван ҡалалары араһында Баҡы һәм уның эргәһендә Демир Капу (Дербент) тип аталған тимер ҡапҡалар бар". Нияз Мәжитов фекеренсә, атап үтелгән пассажда Башҡорт ҡалаһы, йәғни көнбайыш Европа карталарындағы Пашкерти ҡалаһы телгә алына.

Урта быуаттарҙа ҡаланың этник өҫтөнлөклө халыҡ атамаһы буйынса йөрөтөлөүе ғәжәп түгел. Волга Булғарының баш ҡалаһы ул ваҡытта Булғар тип аталыуын иҫкә төшөрөү ҙә етә. Ул ваҡыттағы биләр ырыуының Биләр тип аталған ҡалаһы була. Хәҙерге сыуаштарҙың ата-олаталары булған сувар ырыуының Сувар тигән ҡалаһы була. Мордва-мокшаларҙың Мокша ҡалаһы була.

Н. Мәжитовтың оппоненттары сығанаҡтарҙа биләмә түгел, ә Башҡортостан тигән географик атама тураһында һүҙ бара, тип, Башҡорт ҡалаһының булыуын инҡар итә. Уларҙың кеме хаҡлы икәнен ваҡыт күрһәтер. Әммә Урта быуат Башҡортостанда ҡалаларҙың, шул уҡ Намджан ҡалаһы булыуы факты - шикһеҙ. Шулай уҡ Өфө-II ҡаласығы урынында борон ҡала булыуы ла шик тыуҙырмай. Ул нисек аталғандыр - Ҡараҡаямы, Башҡортмо, Түрә-таумы йәки Өфөмө - артабанғы тикшеренеүҙәр предметы булып тора. Уның сәскә атыу осоро VII-XII быуаттарға тура килә. Монгол баҫмасылығы һөҙөмтәһендә ҡала яйлап бөтә бара. Һуңғы һөжүмдә уға 1389 йылда Башҡортостан буйлап ут һәм ҡылыс менән үткән Тамерлан яһай.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Һығымтала Өфө-II ҡаласығының фәнни әһәмиәте буйынса эксперт советының 2007 йылда ҡабул иткән резолюцияһынан өҙөмтәләр килтерәйек:**

**1)** Өфө-II ҡаласығы уникаль археологик һәйкәл булып тора, уның әһәмиәтен соҡор артындағы ҡәберлек тағы ла көсәйтеп ебәрә. Ҡаласыҡтың мәҙәни ҡатламы 4 метрға етә, был факт һәйкәлдә Көнсығыш Европалағы шуға оҡшаш һәйкәлдәр араһында айырып тора.

**2)** Ҡаҙыныу һөҙөмтәһендә асылған археологик объекттар монументаль архитектура ҡоролмалары категорияһына ҡарай. Ҡаланың һаҡ өсөн тәғәйенләнгән диуары һәйкәл эшләгән осорҙоң иртә этабында төҙөлгән, алдан күҙалланған проект буйынса күтәрелгән һәм үҙаллы үҙенсәлекле хәрби-фортификацион мәктәп булыуын раҫлай.

Эксперт советы ағзалары билдәләр комплексы буйынса беҙҙең эраның IV-XV-XVI быуаттарына ҡараған Өфө-II ҡаласығының юғары фәнни һәм мәҙәни әһәмиәтендә шикләнмәй. Өфө-II ҡаласығы ҙур, быуаттар буйы йәшәгән, административ, сауҙа, һөнәрселек үҙәге, Урал-Волга буйы төбәге тарихының үҙәк пункттарының береһе булып торған.

Эксперт советы ағзалары: Татарстан Республикаһы Фәндәр академияһының мөхбир-ағзаһы, профессор, ТР Фәндәр академияһының баш ғилми хеҙмәткәре Ф.Ш. Хузин (Ҡаҙан); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының Евразия яландарының Урта быуат археологияһы төркөмө мөдире, профессор, тарих фәндәре докторы И.Л. Кызласов (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Сүриә археология экспедицияһының начальник урынбаҫары, тарих фәндәре докторы Ш.Н. Әмиров (Мәскәү); Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының ғилми хеҙмәткәре, Рәсәй Фәндәр академияһы Археология институтының һаҡланыусы ҡаҙылмалар бүлегенең Мәскәү эргәһе экспедицияһы начальнигы урынбаҫары, археометаллургия буйынса халыҡ-ара төркөм ағзаһы, тарих фәндәре кандидаты И. А. Сапрыкина (Мәскәү).

Эксперт советының резолюцияһына Рәсәй Фәндәр академияһының Археология институты директоры, академик Н. А. Макаров ҡултамғаһын һала. Йәғни илдең әйҙәүсе археологтары Өфө-II ҡаласығын донъя әһәмиәтендәге һәйкәл тип таный.

**Салауат ХӘМИҘУЛЛИН.**








✓ *Ул ваҡытта кешеләр бер-береһенә ҡарата йылыраҡ, эскерһеҙ мөнәсәбәттә булған. Хәҙер балаларҙы, киреһенсә, таныш булмаған кешенән бер нәмә лә алмаҫҡа, аралашмаҫҡа, һүҙ ҡушһалар, ситкәрәк китергә өйрәтәбеҙ.*



*БАШ ҠАЛАМ*



# БӘХЕТКӘ СОРНАЛҒАН УЛ

**Минең өсөн Өфө тыуған ҡалам кеүек. Беренсенән, ошонда килеп төйәкләнеүемә ярты быуаттай ваҡыт үтеп тә киткән. Икенсенән, тыуып-үҫкән еремдә күҙ төбәп кенә ҡайтып төшөрлөк ата йорто булмағас, ошо йорт йылыһын ғүмер буйы баш ҡалам алыштырҙы, тиһәң дә булалыр.**

Бында мине республикабыҙҙың иң ҙур уҡыу йортонда белем алыу, абруйлы, билдәле яҙыусыларыбыҙҙы күреү, гөрләп торған студент тормошонда ҡайнау хыялы һәм, иң мөһиме - баш ҡаланың ижад тормошона ҡушылып китеү теләге әйҙәне. Бәхетлемен: хыялдарым тормошҡа ашты. Университеттың "Шоңҡар" әҙәби түңәрәгендә сынығыу алып, ҙур-ҙур яҙыусылар менән осрашып танышыу, аралашыу бәхете тейҙе. Уҡыуымды тамамламаҫ борон уҡ "Башҡортостан пионеры" (әле "Йәншишмә") республика балалар гәзитенә эшкә саҡырып алдылар. Әҙәбиәтебеҙҙең танылған, данлыҡлы әһелдәре - Рәми Ғарипов, Мостай Кәрим, Зәйнәб Биишева, Кәтибә Кинйәбулатова һәм башҡа яҙыусыларыбыҙ менән аралашыу ошо гәзиттә 40 йыл эшләү дәүеренәсә дауам итте. Китаптарым баҫылып сығып тора. Үҙ илеңдә үҙ телеңдә китаптар сығарыу, бер уйлаһаң, үҙе ҙур бәхет.

Баш ҡалабыҙ йылдан-йыл яҡшы яҡҡа үҙгәрә, матурлана; йәйге осорҙа күҙ яуын алырлыҡ сәскәләргә күмелә. Бик уңайлы, фонтандар атып торған ял итеү урындары күбәйҙе. Мин үҙем, мәҫәлән, йәшерәк саҡтарҙа Октябрь проспекты буйлап популяр йырҙа йырланған Өфө йүкәләре араһынан йәйәү йөрөргә ярата инем. Ғөмүмән, Өфө - иҫ киткес йәшеллек ҡалаһы, әллә күпме төрлө ағас һәм ҡыуаҡ үҫә баш ҡала урамдарында. Ирекһеҙҙән, күңелгә шиғыр юлдары килә.

Әйткәндәй, яңыраҡ бер йырсыбыҙ Өфө тураһында яҙылған шиғырымды көй яҙырға тип һорап алды. Шул шиғыр юлдарына һалынған минең Өфөгә булған һөйөү һүҙҙәрем. Өфө - йәшлек ҡалаһы, тиелә унда. Сөнки йәштәр бында республиканың төрлө мөйөштәренән ҡанатланып уҡырға, эшләргә килә.

Өфө - бәхет ҡалаһы, сөнки әлеге йәштәр бында мөхәббәттәрен осратып, ғаилә ҡора.

Өфө - тарих ҡалаһы. Уның мең ярым йыллыҡ тарихын асып, боронғо Өфө ҡалаһын танытып китте мәшһүр ғалимыбыҙ Мәжит ағай Ниязов. Өфө - дуҫлыҡ ҡалаһы. Унда йөҙҙән ашыу төр милләт халҡы йәшәй. Шөкөр, бер ниндәй милләт-ара аңлашылмаусылыҡтар юҡ, булмаһын да. Сөнки ҡалабыҙ ҙа, эскән һыуыбыҙ, һулаған һауабыҙ ҙа, хатта байрамдарыбыҙ ҙа уртаҡ беҙҙең, сөнки барыбыҙ ҙа - өфөләр. Баш ҡалабыҙҙы ла бөтәбеҙ берҙәй үк күреп яратабыҙ, уның менән ғорурланабыҙ.

**Зөһрә ҠОТЛОГИЛДИНА,**
**шағирә, журналист.**

*ӨФӨ БАШҠОРТО*

**Өфө ҡалаһы урамдары буйлап үткәндә бындағы күп ҡатлы йорттар, һәр саҡ яңыртылып торған юлдар, парктарҙа шаулап үҫкән ағастар, кис етеү менән быլҡылдап ҡабынған ут бағаналары ниндәй тарих һаҡлай икән үҙҙәрендә, тип уйланаһың. Ә бына был ҡалала донъяға килеп, ғүмер буйы ошонда йәшәгән кешеләр күңелендә ниндәй хәтирәләр бар? Өфө ҡәлғәһенең 450 йыллыҡ күркәм байрамы айҡанлы, тормошо ошо ҡала менән тығыҙ бәйләгән башҡорттарҙың береһе, билдәле балет бейеүсеһе, Башҡорт опера һәм балет театрында хореограф, педагог-репетитор, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Ринат Әхтәм улы АБУШАХМАНОВ менән әңгәмәләштек. Үҙебеҙҙең һорауҙарға яуап та тапҡандай булдыҡ.**

# "ӨФ" ИТЕП КЕНӘ ЙӘШӘТӘЙЕК ӘЛЕ...

## бай тарихлы баш йортобоҙҙо!



**Әңгәмәне, Өфө башҡорто булараҡ, һеҙҙең баш ҡала тураһындағы хәтирәләрҙән башлап ебәрәйек. Һеҙ белгән элекке Өфө ниндәй ул?**

- Минең бала саҡ хәтирәләремдә һаҡланған Өфө менән хәҙергеһе араһында айырмалар бик күп. Ҡала хәҙер бөтөнләй башҡаса. Элек йорттар әҙерәк, ә ағастар күберәк, тирә-йүн йәшелерәк ине. Беҙҙең бала саҡта иркенләп уйнарға урындар ҙа күберәк булды. Ағиҙел иһә, быйылғы ямғырлы йылдағы кеүек, гел дә ярҙарына тулышып, шаулап ағып ятты. Ә Салауат Юлаев һәйкәле әлеңге кеүек йәшкелт түгел, ҡарағусҡыл төҫтә булып, шунлыҡтанмы, мөһабәтерәк тойола ине...

Миңә алты йәш тулғансы беҙ Өфөнөң Киров урамында йәшәнек, йорт ҡаршыһында завод төҙөлә ине. Беҙ күсенеп киткәнсе лә шул завод төҙөлөшө дауам иткән һымаҡ хәтерләйем, төҙөүселәрҙең көн буйына свай ҡаҡҡан тауыштары иҫтә тороп ҡалған. Ә беҙ, бәләкәй балалар, шул завод эргәһендә велосипедта йөрөйбөҙ, ҡағыҙ осорғостар ебәрәбеҙ. Әммә миңә ете йәштә Ғафури урамына 48-се йортҡа күстек һәм ошо урамды мин айырыуса яҡын күрәм. Тыуған яҡҡа тарта, тиҙәр бит әле. Мин дә Өфөнөң башҡа районддарында, бик матур урындарында булғаным бар, ләкин Телеүҙәк тирәһе гел үҙенә тартып тора. Шуныһы ҡыҙыҡ, ҡатыным Римма Закирова Ғафури урамы 13-сө йортта үҫкән, хәҙер ғаиләбеҙ менән 19-сы йортта йәшәйбеҙ. Бер урталыҡта, бер тирәлә булған бит юлдарыбыҙ.

Бала саҡта кешеләр һәм ваҡиғалар ныҡ иҫтә ҡала. Үҙәк баҙарҙа ул ваҡытта рәт-рәт теҙелешеп ултырып, ҡыҙҙырылған көнбағыш, төрлө башҡа тәмлекәстәр һата торғайнылар. Беҙ унда ағайымдың тыуған көнө - 20 августа һәм минекендә - 31 августа әсәйем менән ҡарбуз һатып алырға бара инек. Ул ваҡытта ҡарбуз бөтә урында ла һатылмай. Ҡарбузды туҡылдатып ҡарап һайлап алып ҡайтыуҙар, ә бер тапҡыр ағайымдың ҡулынан төшөп китеп, "минең" ҡарбуз ярылыуы ҡыҙыҡлы хәтирәләр булып ҡалған ул ваҡыттағы баш ҡала һәм бала саҡтан.

Ағайым менән беҙ хәҙерге Ф. Мостафина исемендәге 20-се Башҡорт ҡала гимназияһында уҡыныҡ. Мин өсөнсө класты тамамлағас, Р. Нуриев исемендәге Башҡорт хореография училищеһына (хәҙер колледж) күстем. Ҡайһы ваҡыт дәрестәрҙән һуң ағай менән икәүләп ҡаланың ҡыҙыҡ урындарына бара торғайныҡ. Ул мине бер тапҡыр Өфөгә килгән зоопаркка ла алып барҙы һәм шунда тәүге тапҡыр арыҫланды, башҡа төрлө хайуандарҙы күргәйнем. Иҫем китеп, тирәяҡҡа ҡарап йөрөп, ишәк өҫтөнә барып мендем. Бала сағыбыҙ шулай күңелле үтте, сөнки бер үҙеңме, йәки дуҫтарың менәнме, бер нәмәнән дә ҡурҡмай, оҙаҡ итеп урамда йөрөргә мөмкин ине. Ә бөгөн мин үҙем атай кеше, балаларымды яңғыҙҙарын ҡайҙалыр оҙаҡҡа ебәрергә ҡурҡам. Машиналар ҙа күбәйҙе, башҡа төрлө хәүеф тә артты.

Элек бит кешеләр ҙә башҡаса ине. Бер ваҡыт әсәйем 15 тин бирҙе лә, туңдырма һатып алырға киттем. Ул саҡта мәктәпкә лә бармағайным әле. Туңдырманың 15 тинлеге булмай сыҡты, 20 тинлеге генә ҡалған. Нимә эшләргә белмәйенсә, магазин алдында торам да торам. Эргәмә бер бабай килде лә, нишләп тораһың, тип һорашып, 20 тин тоттороп китте. Уның аҡсаһына туңдырма һатып алып, әсәйемә 15 тинде кире алып ҡайтып биргәс, ул: "Нишләп теге бабайға шул аҡсаңды бирмәнең?" - тип көйҙө. Киров урамындағы йорттоң тәҙрә төбөндә ҡом менән уйнап ултырғанымда бер оло ғына ағай: "Мә, кәрәкме?"- тип, ҡулыма шар тоттороп киткәне лә хәтеремдә. Бына шулай, ул ваҡытта кешеләр бер-береһенә ҡарата йылыраҡ, эскерһеҙ мөнәсәбәттә булған. Хәҙер балаларҙы, киреһенсә, таныш булмаған кешенән бер нәмә лә алмаҫҡа, бер нәмәгә лә теймәҫкә, хатта таныш булмағандар менән аралашмаҫҡа, һүҙ ҡушһалар, ситкәрәк китергә өйрәтәбеҙ.

**Шәхесте мөхит формалаштыра, тиҙәр. Һеҙ үҫкән мөхит ниндәй булды?**

- Беҙҙең ғаиләне беләһегеҙ, ағайым менән бәләкәйҙән театрҙа үҫтек,

тиһәк тә була, гастролдәргә һәм репетицияларға йөрөнөк. Ҡайһы ваҡыт спектаклде сәхнәгә сығарыр алдынан репетициялар 7-8 сәғәт бара, беҙ йә сәхнә артында, йә тамашасы залында ултырабыҙ. Артистарҙың һүҙҙәрен вис ятлап бөтә инем шунда йөрөп һәм ҡайсаҡ шуклыҡҡа барып, режиссер ярҙамсыһы булған әсәйемә кем ниндәй урында дөрөҫ әйтмәне тип ошаҡлай ҙа инем. Үҙебеҙ ҙә бәләкәйҙән сәхнәгә сыҡтыҡ. Тәүге ролде "Ғәлиәбануы" спектаклендә уйнаным, һүҙҙәрем дә бар ине. Спектаклдән һуң тамашасылар алҡышлай, ә гастролдәр тамамланғас, хатта күпмелер аҡса ла түләнеләр. Күңел "ағыуланды". Унан һуң, атайымды сәхнәлә күреп йөрөүебеҙ ҙә тәьҫир иткәндер беҙгә. Сөнки атай кеше малайҙарға үрнәк бит ул, уға оҡшағың килә һәр ваҡыт. Шулай ҙа беҙ үҙ юлыбыҙҙы һайланыҡ: мин балет бейеүсеһе, хәҙер балетмейстер, ағайым актер һәм режиссер. Барыбер сәхнә, спектакль, театр эргәһендәбеҙ.

**Беҙ һеҙҙең атайығыҙ Әхтәм Әхәт улы Абушахмановты сәхнәләге ролдәре аша бөйөк артист тип беләбеҙ һәм горурланабыҙ. Ә һеҙҙең өсөн ул ниндәй шәхес?**

- Бала саҡта атайыбыҙҙың артист булыуын, уның бөйөклөгөн аңлап та етмәй инек. Был шулай булырға тейеш, тип уйлағанбыҙҙыр инде. Ә хәҙер, үҙемдең дә ғаиләм һәм балаларым булғас, атайым һабаҡтарын иҫкә төшөрәм. Киров урамындағы хәҙерге сиркәү урынында "Йондоҙ" кинотеатры ине һәм шуның тирәһендә бәләкәй генә паркка ҡышҡыһын атай икебеҙҙе лә санала йөрөргә алып сыға торғайны. Әйткәндәй, был кинотеатрға әсәйем яғынан өләсәйем менән һинд киноларын ҡарарға йыш бара инек. Өләсәй русса бөтөнләй аңламай ине, шуға мин уға тәржемә итеп ултырам да, онотолоп китеп тынып ҡалһам: "Нимә тип әйттеләр? Нимә тинеләр?" - тип иплəп кенә төртөп ала торғайны. Бирелеп ҡарай торғайныҡ шул һинд киноларын.

Атай менән йәйгеһен бергәләшеп балыҡҡа ла йөрөнөк, ә баҡса биргәстәр, шуны ҡараныҡ һәм ундағы өйҙә нигеҙенән алып ҡыйыуына тиклем үҙебеҙ һалдыҡ. Ул беҙҙе, үҙе әйтмешләй, ҡул эшенә өйрәтте. Шуға һаман да үҙем оҫталар эшен башҡарырға яратам, үткән аҙнала ғына балаларға карауаттарҙы үҙем ҡороп ҡуйҙым. Һәм шулай дөрөҫ тә, сөнки ир кешенең ҡулы эш белергә тейеш. Йыш ҡына осраҡта "Ир-егет йорт һалырға, ағас ултыртырға, ул үҫтерергә тейеш", тигән ҡағиҙәне ҡулланабыҙ, әммә мәғәнәһен тулыһынса аңлап та етмәйбеҙ кеүек. Бәлки, ир өй һалғанда һәм ағас ултыртҡанда улы менән бергә эшләргә, шул рәүешле нәҫеленә үрнәк күрһәтергә тейештер. Был йәһәттән дә атайым беҙгә үрнәк.

**Ул заманда бик һирәк ғаиләләрҙә балаларына башҡорт телен өйрәтеп үҫтергәндәр, һеҙҙең ғаиләлә был мәсьәлә нисек ҡуйылғайны? Хәҙер үҙегеҙ балаларығыҙҙы шулай уҡ туған телде өйрәтеп тәрбиәләйһегеҙме?**

- Атай-әсәйем өйҙә тик башҡортса һөйләште, Башҡорт академия драма театрында ла барыһы ла туған телебеҙҙә аралашты, балаларын башҡорт мәктәбенә уҡырға бирҙеләр. Ләкин хореография училищеһына уҡырға ингәндән бирле башҡортса тик өйҙә генә һөйләшергә тура килде. Эйе, балаларыбыҙға ла туған телде өйрәтергә тырышабыҙ. Дөрөҫөн әйткәндә, был ауырыраҡ бирелә. Әлбиттә, өйҙә улар туған телдә аралаша, әммә был ғына етмәй. Улар башҡорт телен мин белгән ҡәҙәре лә белмәҫ, тип борсолам хәҙер. Бында интернет заманының балаларҙы ылыҡтырғыс һәр төрлө ысулдары булыуы, унда башҡорт телендә ҡыҙыҡлылары етешмәүе лә үҙ ролен уйнамай ҡалмай. Ғөмүмән, йәш быуынға туған телде өйрәтеү мәсьәләһе хәҙер ҡалаларҙа ғына түгел, ауылдарҙа ла көнүҙәк: Әбйәлилгә йыл да ҡайтабыҙ һәм ауылдаштар менән балалар менән башҡортса һөйләшеүемә аптырай, "Ҡаланан килеп, ҡарасәле, башҡортса һөйләшәләр", - тиҙәр. Ауылдарҙа ла туған телен белмәй үҫеп килгән балалар бар, ҡыҙғаныҫҡа күрә.

**Рудольф Нуриев "Сыңрау торна" балетын ҡарап, был сәнғәткә ғашиҡ булған, тиҙәр. Ә һеҙ ниңә балетты һайланығыҙ?**

- Мин тәү күреүҙән үк балетҡа ғашиҡ булманым. Уның ниндәй ауыр һөнәр икәнен аңлап та етмәй инем уҡырға ингәндә. 20-се мәктәптәге дуҫтарыма: "20 йыл эшләйем дә, хаҡлы ялға сығам", - тип маҡтанғанмын. Ул ғына пенсия хаҡына йәшәп булмаҫын кем белгән инде! Хореография колледжына халыҡ бейеүе курсында уҡырға теләп индем, ләкин мин барған йылда был курсҡа йыйманылар, аҙаҡ күсергә булыр, тинеләр. Өс йылдан күсергә мөмкинлек булғайны ла, БАССР-ҙың халыҡ артисы Юлай Ғиниәт улы Ушанов уҡытырға килде һәм... күңелдәргә ҡуҙ һалды - уҡытыусы ла үрнәк булырға тейештер. Уға ҡарап, беҙҙең дә данлыҡлы балет бейеүсеһе булырға теләгебеҙ уянды. Балет донъяһына минең юлым шулай башланды.

Ҡәҙимге театрҙағы кеүек, балетта яңы спектаклдәр йыш ҡуйылмай, ә дәүләт заказы буйынса ғына эшләнә. Сөнки балет - ҡатмарлы әҫәр, ул күп кешеләрҙең хеҙмәт емеше, күп сығымдар талап итә. Шуға, йылына бер яңы спектакль ҡуябыҙ, йәки ике йылға бер спектакль. Драма театрында спектакль ҡуйылғандан һуң бер нисә йыл уйнала ла репертуарҙан төшөп ҡала, ә беҙҙә улай түгел. Мәҫәлән, "Аҡҡош күле" ике йөҙ йыл бара һәм шулай дауам итәсәк тә. "Сыңрау торна"ны ла бөтә донъя башҡорт классикаһы тип белә, ул да репертуарҙа бар.

Шулай ҙа беҙ ҙә тик ултырмайбыҙ, быйыл бер нисә йыл элек Шүлгәнташ мәмерйәһе тураһында "Таштар нимә тураһында өндәшмәй" тигән һәм Йөрәктау легендаһы буйынса "Һүнгән йондоҙ яҡтыһы" тигән спектаклдәр ҡуйғайным, әле бына "Ете ҡыҙ" балеты буйынса эшләйбеҙ. Һуңғыһын ул ваҡытта театрыбыҙҙың директоры Илмар Әлмөхәмәтов һәм Галина Йыһанова ижад итеп, минә тәҡдим иттеләр. "Ете ҡыҙ" буйынса бер йыл эшләйбеҙ, ҡайһы бер үҙгәрештәр ҙә индерҙек. Спектаклдең премьераһын Өфө ҡалғәненең 450 йыллығына арнап, тамашасы иғтибарына август айында тәҡдим итергә ниәтләгәйнек тә, балет труппаһын концертҡа саҡырыуҙары сәбәпле, октябрь айына күсерҙек. Шулай уҡ баш ҡалаға ла, Республика көнөнә лә арнап, 10 һәм 12 октябрҙә күрһәтәсәкбеҙ. Башҡорт халыҡ легендаһына нигеҙләнгән тағы бер балет буласаҡ.

**Әңгәмә һуңында баш ҡала темаһына тағы бер ҡайтып, һеҙҙән йылдан-йыл үҙгәреп торған Өфөнөң күңелегеҙгә ятҡан һәм бик үк оҡшап етмәгән яҡтары ниндәй икәнен дә ишетке килә?**

- Өфө йылдан-йыл заманса ҡалаға әүерелә бара. Бының һәйбәт яҡтары күп, шулай ҙа күңелһеҙ күренештәре лә юҡ түгел: бейек һәм ялтырап торған яңы йорттар, биналар ҡалҡып сыға ла, быға тиклем эргәләренән үткәндә хәтирәләрҙе яңыртып, һырлы ҡапҡаслы тәҙрәләре күңелдәрҙе йылытып ултырған өйҙәр юҡ була. Ә элекке шул өйҙәрҙең ҡайһы берҙәрен тыштан да, эстән дә яңыртып, тарихи йөҙөн һаҡлап ҡалһалар, ҡайһылай матур булыр ине. Бындай өйҙәр торған урамдарҙан балалар менән йәйәү йөрөргә мөмкин булыр ине. Бына Октябрь революцияһы урамы йәйәүлеләр өсөн генә тәғәйенләнәсәк, тип ишеткәйнем. Бик шәп буласаҡ был. Баш ҡалаға килгән ҡунаҡтарға Салауат Юлаев һәйкәле һәм Совет майҙанынан тыш, күрһәтер, хайран итер матур урындарыбыҙ күберәк кәрәк. Юғиһә, ҡунаҡтарҙы башҡорт донъяһы, республикаң тәбиғәте менән таныштырыу өсөн ҡаланан ҡайҙалыр ситкә, Инйәр буйҙарынамы, Бөрйәнгәме алып барырға тура килә.

Һуңғы йылдарҙа баш ҡалала күңелгә ятҡан үҙгәрештәрҙән - велосипедсылар өсөн айырым юл һыҙаттары эшләнде. Мин эшкә лә, магазинға ла самокатта йөрөйөм һәм айырым һыҙат булыуы бик уңайлы. Әммә әлегә барыһы ла был яңылыҡҡа күнегеп бөтә алмаймы, машиналарҙа ла ошо һыҙаттан йөрөүселәр, хатта махсус юл һыҙатын туҡталҡаға әүерелдереүселәр күп. Тротуарҙарҙа ла машина менән үтеп йөрөүселәр, йәйәүлеләргә юлды ҡаплап, машиналарын ҡуйып китеүселәр байтаҡ. Ҡалабыҙ тағы ла уңайлыраҡ, бала-сағаға һәм өлкәндәргә хәүефһеҙерәк булһын өсөн бына ошондай мәсьәләләрҙә тәртип урынлаштырып бөтөү талап ителәбөгөн.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**"Өфө йылдан-йыл матурлана, яңы юлдар һалына, яңы йорттар төҙөлә, йәмәғәт урындары төҙөкләндерелә, әммә баш ҡала кешеһе үҙе үк шуны бысратып, тәмәке төпсөгөн ташлап, төкөрөп китеүе ихтимал. Тыуған йортобоҙға һаҡсыл ҡараштa булһаҡ һәм был эште һәр кем үҙенән башлаһа ине. Миллионлы ҡалала һәр беребеҙ бер яҡшылыҡ эшләһә, ул ниндәй ҙур көскә әүереләсәк", - тине Ринат Әхтәм улы, өфөләргә әйтергә телəгән һүҙҙәре хаҡында һорағас. Ысынлап та, бер баҡ кеүек гүзәл, уны килеп күргән һәр кемдең күңелендә яҡты иҫтәлектәр ҡалдырыр, бай тарихлы Өфөбөҙҙө "өф" итеп кенә йәшәтәйек!**

**Сәриә ҒАРИПОВА**
**әңгәмәләште.**

ӘЙТӘГҮР!



# ҠЫЛЫҒЫ-ФИҒЕЛЕ НИНДӘЙ?

**Гәзитебеҙҙең бер һанында Өфө кешеһенә хас ҡылыҡ-фиғелдәр тураһында һорау-яуап ойоштторғайныҡ. Иҫкә төшөрәйек әле.**

***Яҙыусы Айҙар Хөсәйенов шулайыраҡ ҡылыҡһырлағайны Өфө кешеһен:***

- Һәр өфөләнөң бөйөк яҡташтарына ниндәйҙер дәғүәһе бар.
- Өфө кешеһе менән идара итеүҙең берҙән-бер юлы - уны туҡтауһыҙ шелтәләү.
- Ул әлеге ваҡытта кем менән һөйләшеп тора, тик шуны ғына ихтирам итә.
- Өфөләнең ниндәй ҙә булһа идеяһы - тик уныҡы ғына, ә ҡалған кешенең фекере - дөйөм.
- Бер Өфө кешеһе икенсе Өфө кешеһе менән һауа торошо тураһында һөйләшә алһын өсөн улар бер-береһен егерме йыл тирәһе белергә тейеш.
- Нимә генә ишетһә лә, ул: "Мин ҡаршы!" - тип әйтергә әҙер.
- Өфөләгә ҡышын һыуыҡ, йәйгеһен эҫе, яҙ көнө - бысраҡ, көҙөн яуынлы һәм ҡараңғы.
- Ул ғәҙелһеҙлек менән бер төрлө генә көрәшә - тыныс ҡына көтә.
- Шағир менән осрашҡанда Өфө кешеһе мотлаҡ: "Мин дә шиғыр яҙам", - тип әйтәсәк.
- Үҙенеке - тик уныҡы, ә дуҫтары һәм туғандарыныҡы - дөйөм.
- Үҙен яҡшы кеше тип һанаған өфөлә, нисек теләйем, шулай эшләйем, тигән хоҡуҡҡа эйәмен, тип уйлай.
- Өфөлә башҡаларҙың уңышын һәм үҙенең еңелеүен танымай.
- Уның менән бәхәсләшеү - дегет мисҡәһенә бал ҡойоуға бәрәбәр, балды күберәк һалған һайын дегет күбәйә бара.
- Ул бөтә нәмәне лә тиҙ һәм еңел эшләргә теләй.
- Өфөлә йәки үпкәләй, йәки үҙе кемдендер хәтерен ҡалдыра.
- Барыһы ла ҡыҙыҡлы һәм бушлай булһын тигән теләк - Өфө кешеһенә хас холоҡ.
- Уның өсөн хәбәрҙең мөһимлеге ул хәбәрҙе кем ауыҙынан сығыуына бәйле.

***Ә бына Булат Ғәлиев исемле блогер Өфө кешеһен шулайыраҡ ҡабул итә:***

- Беҙ барыбыҙ ҙа "Хрусталь", "Восьмиэтажка" һәм "Йүрүҙән"де беләбеҙ, ә ысынында ундай туҡталыштар юҡ.
- Нефтҡә бай республикала йәшәүеңде беләһең, ләкин ни өсөн бензинға хаҡ илдә иң юғарылар рәтендә икәнен аңламайһың.
- Өфөлә билдәле урындар юҡ тиерлек, тип үкенес белдерәһең, ә ошоно уҡ ситтән килеүсе әйтһә, ауыҙҙан төкөрөк сәсеп, киреһен иҫбатларға тырышаһың.
- Һәр ваҡыт ҡала башлығын әрләйһең, ләкин үҙең бер ҡасан да өмәләргә сыҡмайһың.
- Ҡаланың бер районынан икенсеһенә барыуҙы күрше ҡалаға барған кеүек ҡабул итәһең.
- Өфөләнең өҫтәлендә һәр ваҡыт бал һәм сәк-сәк бар.
- Әгәр ҙә Һупайлы биҫтәһендә йәшәһәң, ямғыр ҡойоп яуған ваҡытта өйҙән сыҡмау хәйерлерәк икәнен дә яҡшы төшөнгәнбеҙ.
- Ҡаланың бер осонан икенсеһенә тиклем барып еткәнсе, Мостай Кәримдең "Оҙон-оҙаҡ бала саҡ" әҫәрен уҡып бөтөргә мөмкинбеҙ.
- Беҙгә килгән ҡунаҡтарҙы мотлаҡ Салауат Юлаев һәйкәлен күрһәтергә алып барабыҙ...

**Шулай итеп, Өфө кешеһенә хас ҡылыҡ-фиғелдәр исемлеген дауам итеп, редакцияға яҙып ебәрә алаһығыҙ. Әйҙәгеҙ!**

ИНТЕРНЕТТАН



# БАЛА НИҢӘ ИЛАЙ?

■ Валенсия университеты ғалимдары сабый илауының тотош классификацияһын төҙөгән. Бала нимәгә илауын аңлау өсөн уның йөҙөнә ҡарау ҙа етә, тип яҙа "МедВести". Тикшеренеүҙәрҙең авторы доктор Мариано Холиз иҫәпләүенсә, илау - бала өсөн үҙенең негатив эмоцияларын күрһәтеүҙең берҙән-бер юлы. Уның йөҙөндәге мимикаға ҡарап, яҡынса илауҙың сәбәбен аңларға мөмкин. Әгәр ҙә бала илағанда уның күҙҙәре асыҡ икән, ул йә ҡурҡҡан, йә көйгән. Күҙҙәрен йомоп илаһа, уның ҡайһылыр ере ауырта. Бынан тыш, илау тауышы ла әһәмиәтле. Үпкәләгән бала башта ҡыҫҡырып илай, әммә яйлап тауышын баҫа бара. Ауыртыуҙан илағаны иһә, киреһенсә, тыныс ҡына илай башлап, оҙаҡ итеп ҡысҡырып илаясаҡ. Ҡурҡҡан осраҡта ла ошондай хәл буласаҡ. Психологтар раҫлауынса, эскә йомолған кире тойғолар, ҡайғылар, үпкәләүҙәр физик сәләмәтлек өсөн зыянлы. Шуға ла улар оло-ларға ла иларға кәңәш итә. Табиптар белдереүенсә, иламай сыҙап йөрөү үлем хәүефен тыуҙыра, шуға ла ирҙәрҙең ҡатындарға ҡарағанда уртаса 7 йылға әҙерәк йәшәүендә ошо сәбәп ятыуы ихтимал, ти улар.

■ Бөтөн донъя яман шеш тикшеренеүҙәре фонды белгестәре фекеренсә, йәйәү йөрөү яман шеш сирҙәрен булдырмау өсөн дә файҙалы. Көн һайын 45 минут физик әүҙемлек тә күптәрҙе был сирҙән ҡотҡара алыр ине, тип иҫәпләй табиптар. Медицина статистикаһы күрһәтеүенсә, даими әүҙемлек онкологик сирҙәрҙе булдырмауҙа мөһим урын биләй. Физик әүҙемлек матдәләр алышыныу һәм организмдың таҙарыныу процесын көсәйтә. Яман шештең күп төрҙәре менән тап физик күнекмәләр ярҙамында көрәшергә була, тип белдерә ғалимдар.

■ Белгестәр мәғлүмәттәре буйынса, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үсмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары йышыраҡ осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә һәм шуға ла ата-әсәләре менән конфликтҡа инә. Бынан тыш, был үсмерҙәрҙең 62 проценты тәмәке тарта һәм 79 проценты алкоголле эсемлек ҡуллана. Белгестәр әйтеүенсә, социаль селтәрҙәрҙә әүҙем аралашыусы үсмерҙәр иртә енси тормош башлай һәм улар араһында наркомандар күберәк була.

■ Лос-Анджелестың Cedars-Sinai медицина үҙәге тикшеренеүселәре куркума нигеҙендә яңы препарат уйлап тапҡан. Ул инсульттан һуң тиҙерәк һауығырға мөмкинлек бирә. Ғалимдар әйтеүенсә, был дарыуҙы ауырыуҙы иҫкәртеү маҡсатында ҡулланырға ла буласаҡ. Яңы дарыуҙың төп тәьҫир итеүсе матдәһе булып куркумаға сағыу төҫ биреүсе полифенол - куркумин тора. Ул ялҡынһыныуға ҡаршы һәм антиоксидант тәьҫиргә эйә. Яңы дарыуҙы инсульт кисергән кешенең организмына өс сәғәт эсендә индереп өлгөргәндә, баш мейеһе күҙәнәктәрен тере килеш һаҡлап алып ҡалырға мөмкин, ти ғалимдар. Был тәмләткесте ашыу әҙерләгәндә лә йышыраҡ ҡулланыу зарарлы булмаясаҡ.

■ Һеҙ дөрөҫ туҡланһағыҙ һәм даими рәүештә спорт менән шөғөлләнһәгеҙ ҙә ултыраҡ тормош организмға кире тәьҫир итә, тип иҫәпләй Тель-Авив университеты ғалимдары. Бер үк позала ултырыу организмға май йыйылыуға килтерә. Әгәр ҙә кеше оҙаҡ хәрәкәтләнмәйенсә ултырһа, бер ниндәй диеталар ҙа ярҙам итмәйәсәк.

# БЕҘ - ӨФӨ БУРАНБАЙҘАРЫ



**Тыуған ауылыбыҙ, Баймаҡ районының Буранбай ауылы тураһында күпте һөйләргә булыр ине. Совет осоронда беҙҙең ауылды "муллалар ауылы" тип йөрөтһәләр, хәҙер "йырсылар ауылы" тиҙәр. Шуныһы ла мәғлүм булһын: беҙҙең ауылда тик боронғо халыҡ йырын башҡарыу ғына йырлай белеүгә иҫәпләнә.**

2007 йылдың 7 декабрендә Өфөнөң Конгресс-холл бинаһында ауылыбыҙ менән баш ҡалабыҙ халҡы өсөн концерт күрһәттек. Унда ауылыбыҙҙан барлығы 75 кеше ҡатнашты. Саранан алған тәьҫораттары тураһында тамашасылар һаман да һөйләйҙәр. Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре Рәмил Хәсәнов "Сәхнәлә - Буранбайҙар" тигән шиғыр ҙа ижад итте. Күләмле мәҙхиәһе шундай юлдар менән башланып китә:

*Сәхнә тулы Буранбайҙар,*
*Ҡурай уйнап йырлайҙар.*
*Ғәйетбаев,Ҡотоевтар,*
*Раевтар, Аралбайҙар.*
*Ут сәсрәтеп дәртле бейей,*
*"Еҙ үксә" малайҙары.*
*" Әрме" көйөнә йырлайҙар*
*Буранбай бабайҙары.*
*Аҡкош кеүек һылыу ҡыҙҙар,*
*Гүйә күлдә йөҙәләр.*
*Бишек йырына апайҙар,*
*Эй, үҙәкте өҙәләр.*
*Рәйестең рух-шәрифенә,*
*Үтәбай шиғыр һөйләй.*
*Йөрәк әрней, күңел һыктай,*
*Тик Түләк үҙе белмәй...*

Үткән быуаттың һикһәненсе йылдарына тиклем беҙҙең ауылдан баш ҡалабыҙҙа йәшәүселәрҙең һаны бер ҡулдың биш бармағы нисбәтендә генә ине. Уларҙың иң танылғандары: Башҡортостандың Юғары судында эшләүсе Дәминдәр Рамаҙан улы Хәмитов менән билдәле педагог Маһинур Мөхлис ҡыҙы Үтәбаева. Хәҙер инде Буранбай ауылында тыуып үҫеп, Өфө кешеләре булып киткән сәнғәт, мәҙәниәт, мәғариф, әҙәбиәт, нәшриәт, сәнәғәт, эшҡыуарлыҡ өлкәһендә хеҙмәт итеүсе ауылдаштарым йөҙҙән ашып киткән, йәғни баш ҡалабыҙҙың тотош ауылын тәшкил итерлек нисбәттә улар.

Ауылдашым, мәшһүр шағир Рәйес Түләк менән икебеҙҙең берлектә сыҡҡан "Буранбайҙың яҙған хатын уҡып" тигән шиғыр китабыбыҙға яҙған баш һүҙендә Башҡортостандың халыҡ шағиры Рауил Бикбаев: "Уларҙың сабый һуҡмаҡтары Баймаҡ еренә уйылған, тыуған ауылдары - Буранбай, йөҙөргә өйрәнгән йылғалары - Һаҡмар. Яҙмышында ошо өс һүҙҙең - Һаҡмарҙың, Баймаҡтың, Буранбайҙың бергә килеп үрелеүе - башҡорт балаһы өсөн ни тиклем оло бәхет", - тигәйне. Ауылдаштарым халыҡ шағиры әйткән был хәҡиҡәтте бик яҡшы аңлай, ниндәй ауылдан сыҡҡандарын белгәнгә күрә лә, үҙҙәре хеҙмәт иткән өлкәлә оло яуаплылыҡ тойоп эшләй. Буранбай сәсәндең вариҫтары булараҡ, уртаҡул була алмай ауылдаштарым. Ниндәй генә өлкәлә эшләмәһендәр, уларҙы фиҙаҡәрлек биҙәй. Беҙҙә баш ҡалабыҙ халҡы әлләләй ҡайҙан таный: Рәсих һәм Таһир Хәмитовтарҙы, Наил һәм Әхиәт Ғәйетбаевтарҙы, Марсель, Нух, Вилдан, Фәрүәз Ҡотоевтарҙы, Иҙел һәм Буранбай Аралбаевтарҙы, Гөлдәниә һәм Юнир Һағынбаевтарҙы, Ирғәле һәм Нурғәле Байрамғоловтарҙы, Алһыу Сирғәлина-Алтынбаеваны, Фәимә Ишморатова-Туйсинаны һ.б. Баш ҡалабыҙ Өфөлә ипотекаға фатир алып, уның тирәһендәге ауылдарҙа йорттар һалып, төҙөлөш, сауҙа өлкәләрендә үҙ эштәрен асып, ҙур уңышҡа өлгәшеп йәшәгән йәштәребеҙ ҙә ифрат күп. Ҡайһы берәүҙәренең үҙ предприятиелары бар. Улар хаҡында айырым мәҡәлә яҙырға мөмкин булыр ине.

Бер нисә ауылдашыма бер үк һорауҙы бирип, уларҙың яуаптарын уҡыусылар иғтибарына тәҡдим итергә булдым. Һорауым түбәндәгесә ине: "Беҙ тыуған ауылыбыҙ Буранбайҙа тыуып үҫеп, ҡасандыр Өфө кешеһе булып китеүебеҙҙе күҙ алдыбыҙға ла килтерә алмай инек. Нисек Өфө кешеһе булып киттең, ниндәй ауырлыҡтар аша үтергә тура килде? Нимә генә тимә, Өфө ауылдан килеүселәргә ҡапҡаларын шар асып тормай..."

***Рәсих Әғзәм улы ХӘМИТОВ, Башҡортостан Республикаһы Башлығы кәңәшсеһе, БР-ҙың атҡаҙанған металлургы:*** "Ғүмеремә яңы һулыш биргән яратҡан Өфөм" тип башлар инем хәтирәләремде. Быйыл август айында Өфөгә килеп төпләнеүебеҙгә 31 йыл да булып китте. Әлбиттә, юлдар бик ураү булды. Поезға ултырыпмы, автобус менәнме, машиналамы, ҡайҙа ғына йүнәлһәк тә, юлыбыҙ баш ҡалабыҙ аша үтеп, уның аша тыуған яғым Баймаҡҡа ҡайтырға тура килде. Һәр ваҡытта ла Өфөбеҙ үҙенә тартып торҙо. 1964 йылда, Беренсе Эткол урта мәктәбендә алтынсы класта уҡығанда минә "Артек"кә путевка бирҙеләр. Мине Өфөгә атайым алып килде. Ул ваҡытта Өфөлә яҡташтарыбыҙ һәм туғандарыбыҙ Зәкәриә Аҡназаров, Клара Төхфәтуллина эшләй ине, уларға ла барҙыҡ. Артабан поезға ултырып, Ҡырымдағы "Артек"кә юл алдым. 1969 йылда Өфөнө икенсегә күрҙем. Башҡорт АССР-ы ойошторолоуға 50 йыл тулыуҙы билдәләне республикабыҙ. Беҙ, Сибайҙан күп кенә профессиональ сәнғәт эшмәкәрҙәре менән үҙешмәкәр бейеү түңәрәгендә йөрөгәндәр ҙә килдек. Өфөләге ҙур байрам тантаналарында ҡатнаштыҡ. Иң ҙур тәьҫораттыбыҙ алыҫ-алыҫтарҙан күренеп торған Салауат батырыбыҙ ине. Аҙаҡтан Алыҫ Көнсығышта, әрме сафында йөрөгәндә, төрлө урындарҙа практика үткәндә лә, Калининградта, Норильскиҙа, Магаданда эшләгәндә лә юлдарыбыҙ Өфө аша үтте.

Мин һәр ваҡыт баш ҡалабыҙға һоҡланып ҡарайым. Ул алыҫтарҙан балҡып күренә. 90-сы йылдар башында Башҡортостандың иҡтисади үҙаллылыҡ алыуы, үҙенең нефть, тау сәнәғәтен үҫтереү буйынса закондар ҡабул итеүе егерме йыл һуҙымында Сибайҙа етештереү өлкәһендә эшләп йөрөгән кешене ошонда саҡырып килтерҙе. Тау геологияһы, нефть өлкәләрендә эшләр өсөн кадрҙар кәрәк ине. Ғаиләм менән кәңәшләштек тә ошонда күсеп килдек. Һис тә үкенмәйем, сөнки Өфө минә, балаларыма, туғандарыма яңы һулыш бирҙе. Беҙ Өфөбеҙҙә, республикабыҙҙы үҫтереү өсөн фиҙаҡәр хеҙмәтебеҙҙе һалдыҡ.

Мин Өфөгә 450 йыл ғына тип иҫәпләмәйем. Тау геологияһы инженеры булараҡ, мин уның йәшен меңәр йылдан ашыу икәнлеген беләм. Был ерҙәрҙән үткән Ибн Фаҙлан һәм донъяның башҡа бик күп ғалимдары Өфөнөң меңәр йыллыҡ, быуаттарҙан-быуаттарға теркәлгән тарихы барлығын яҙған.

Һуңғы биш йыл эсендә баш ҡалабыҙҙа бик ҙур үҙгәрештәр күҙәтелде. Өфөбеҙ йәшәне, йәшәр һәм йәшәйәсәк!

**✓ Өфө ҙур ҡала, ул кешене ҡапыл ғына ҡабул итмәй. Күп кенә кешеләр шул арҡала Өфөгә килмәй ҡалғандыр. Мин Өфөгә килһәм дә, урман эсендә яңғыҙ тороп ҡалмаясағымды, унда "Буранбай тигән ауыл" барлығын белә инем.**

# ...БАР БЕР АУЫЛ

***Әхиәт Ғиниәт улы ҒӘЙЕТБАЕВ, ҡурайсы, Башҡортостан Республикаһының атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре, Ә.Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбе директоры:*** Өфөгә мин ҙур әҙерлек менән килдем. Уға тиклем Өфө сәнғәт училищеһында ҡурай бүлегендә, Башҡорт дәүләт университетының журналистика бүлегендә, сәнғәт институтында уҡыным. Хеҙмәт биографиямды Баймаҡта башланым, Сибайҙа ла эшләнем. Әхмәр ағай осратҡан һайын: "Һин Ағиҙел, Ҡариҙел йылғаларында йөҙә торған карапһың, ә бында Һаҡмарҙы, Таналыҡты быуып ултыраһың", - тип мәрәкәләп Өфөгә саҡыра торғайны.

Өфө ҙур ҡала, ул кешене ҡапыл ғына ҡабул итмәй. Күп кенә кешеләр шул арҡала Өфөгә килмәй ҡалғандыр. Мин Өфөгә килһәм дә, урман эсендә яңғыҙ тороп ҡалмаясағымды, унда "Буранбай тигән ауыл" барлығын белә инем. Шуға күрә көндәрҙән бер көндө сумаҙанымды алып, Өфөгә табан атланым. Килгәс тә урамда эш эҙләп йөрөргә тура килмәне, М.Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театрында директор урынбаҫары булып эшләй башланым. Артабан Әҙеһәм Исҡужин исемендәге Балалар сәнғәт мәктәбе директоры булып киттем. Әле шунда эшләүемә ун һигеҙ йыл булып киткән.

Өфөгә килгәс тә үҙемде иркен тоттом. Сөнки Сибайҙа йыһазландырылған фатирым бар ине. Шуға күрә сумаҙандар күтәреп, ҡуртымға фатир алып йәшәһәм дә, артыҡ борсолманым. Әгәр ҙә бында килеп сыҡмаһа, кире сигенерлек әмәлем дә булды. Ғөмүмән, кеше төшөнкөлөккә бирелмәһә, алдына ҡуйған маҡсатына барып етәлер, тип уйлайым. Минең бер дуҫым булды. Ул Өфөгә ғаиләһе менән килде, бар урында ла ярһып йөрөнө. Бар урындарға фатир, эш урыны һорап хаттар яҙҙы. Һөҙөмтәлә йыл ярым ярһып, ҡаңғырып йөрөнө лә, ҡайтып китте. Миңә эшкә урынлашҡанда күп кенә яҡташ ағайҙар ярҙам ҡулы һуҙҙы. Уларға сикһеҙ рәхмәтлемен. Шулай итеп, яйлап-яйлап Өфө кешеһе булып киттем.

***Фәимә Ғибаҙулла ҡыҙы ИШМОРАТОВА, Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернаты тәрбиәсеһе:*** Бала сағымда Өфө ҡалаһында йәшәү тормошҡа ашмаҫлыҡ хыял ғына ине. Бишенсе класты тамамлағас, Баймаҡ ҡалаһындағы интернат-мәктәпкә уҡырға барҙым. Унда ун беренсене тамамланым. Артабан ун туғыҙ йәшемдә кейәүгә сығып, Хәрби диңгеҙ флотында хеҙмәт итеүсе иптәшем Фәнис Ишморатов менән Мурманск өлкәһендәге хәрби ҡаласыҡта йәшәнек. 2000 йылда Фәнис һәләк булғас, кире тыуған яғыма ҡайттым. Әммә тыуған яғымда үҙемде кәрәкле кеше итеп тоя алманым. Бәлки, миллион кеше йәшәгән ҡалаға инеп юғалырға, һағыштарымды аҙаштырырға теләгәнмендер, Өфө ҡалаһына килдем һәм юридик институтҡа уҡырға индем.

Әлбиттә, Өфө ҡалаһындағы йәшәйештең үҙ ауырлыҡтары бар. Әммә үҙемдең тырышлығым, сабырлығым менән ҡаршылыҡтарҙы, ауырлыҡтарҙы еңеп сығып, баш ҡалабыҙҙа үҙ йортомдо һәм үҙ урынымды таптым, тип иҫәпләйем.

***Таһир Дидар улы ХӘМИТОВ, ҡурайсы, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы:*** 1985 йылда урта мәктәпте тамамлағас, атайымдың кәңәше буйынса Өфө сәнғәт училищеһына уҡырға индем. Мәктәптән яҡшы характеристика яҙып бирҙеләр. Әсәйем мине Ҡаратал ауылынан Хәмитов Рәфҡәт тигән ағайға эйәртеп, Өфөгә ебәрҙе. Йыр бүлегенә тип килгәйнем, ҡурай бүлегенә инеп киттем. 1986-1988 йылдарҙа әрме сафында хеҙмәт иткәс, уҡыуымды дауам итеп, училищены 1991 йылда тамамланым. Башҡорт дәүләт университетында Илгиз ағайым уҡыны, уға барып йөрөнөм. Дәминдәр олатайым Хәмитовтарға ла йыш барҙым. 1996 йылда инде сәнғәт институтын тамамланым. 1997 йылда училищебыҙҙа ҡурай бүлеге асылды, унда Ришат ағай Рәхимов менән бергә эшләй башланым. Хәҙер 35 йыл ҡурайға хеҙмәт итәм. Үҙемдең байтаҡ ҡына уҡыусыларым бар, хәҙер инде уҡыусыларымдың уҡыусылары ҡурайға уҡырға килә. Параллель рәүештә Өфө сәнғәт институтында ла эшләнем. 2000 йылда халыҡ музыка ҡоралдары оркестры асылғайны, унда солист булып эшләнем.

1997 йылда йәш белгес булараҡ фатир бирҙеләр. Шулай итеп, яйлап-яйлап Өфө кешеһе булып киттем инде. 1993 йылда өйләндем, ике ҡыҙым бар. Хәҙер улар үҙаллы йәшәй. Әле Өфө сәнғәт училищеһында бүлек мөдире булып эшләйем.

## ШУЛАЙ ИТЕП...

Үҙем иһә 1977 йылдың йәйендә тәүге тапҡыр Өфө ҡалаһына аяҡ баҫтым. Ул саҡта яңы һигеҙенсене тамамлаған Әхиәт ҡустым Ғәйетбаев менән Өфө сәнғәт училищеһының ҡурай бүлегенә уҡырға тип килгәйнек. Беҙ һуңланыҡ, училищеға барғанда имтихандар тамамланғайны. Яҡташыбыҙ, мәшһүр ҡурайсы Ришат ағай Рәхимов Ғата Сөләймәновтың өйөнә ебәрҙе. Ғата ағайҙың өйөнә "баҫып" барып индек. Ул беҙҙе ҡурай уйнатып ҡараны ла, миңә: "Һин унды бөткәнһең, уҡырға алһаҡ, әрмегә алып китәләр. Ҡустыңды алабыҙ, һин әрменән һуң килерһең", - тине. Мин уға: "Әрменән һуң килеп тә тормайым", - тип кеҙеләндем. Әхиәт әйтеүенсә, Ғата ағай һуңынан минең хаҡта гел һорашып торған.

Башҡорт дәүләт педагогия институтын тамамлағандан һуң, әрмегә барҙым. Әрменән тура Өфөгә ҡайттым. 1991 йылда Магнитогорск телестудияһында башҡорт редакцияһын ойоштороу сәбәпле бер йыл Өфөнән айырылып торҙом, ә тормошомдоң ҡалған барлыҡ йылдары баш ҡалабыҙ менән бәйле үтте.

Беҙ, Өфө Буранбайҙары, йолаларыбыҙ, рухи булмышыбыҙ менән үҙ йырҙарыбыҙҙы йырлап, халҡыбыҙ мәнфәғәтенә хеҙмәт итәбеҙ. Рухи йәһәттән ауылда нисек булһаҡ, шул килеш ҡалдыҡ. Шуныһы һөйөнөслө, яңы кешеләр менән танышҡан саҡта: "Баймаҡтан, Буранбайҙан", - тиһәк, беҙгә йылмаялар ҙа: "Йырсымы, ҡурайсымы, яҙыусымы?" - тип һорайҙар. Ауылыбыҙҙың исеме халҡыбыҙҙың сәнғәте, мәҙәниәте менән бер ҡатар икәнлеген аңлау, әлбиттә, күңелебеҙҙә шатлыҡ уята. Шулай ҙа беҙ, Өфө Буранбайҙары, тик сәнғәт, мәҙәниәт, әҙәбиәт өлкәләрендә генә хеҙмәт итеп ҡалмайбыҙ, сәнәғәт, төҙөлөш, эшҡыуарлыҡ буйынса ла әүҙем эшләгән йәштәребеҙ бихисап.

Ғүмере иртә өҙөлгән мәшһүр Түләгебеҙҙең шиғыр-поэмалары башҡорт шиғриәтенең иң юғары өлгөләрен тәшкил итә - был ғорурлыҡ түгелме ни! Иҙелебеҙ опера сәхнәһендә Салауат батырыбыҙҙы һынландырып, уның легендар партияһын башҡара икән - был ғорурлыҡ түгелме ни! Марселебеҙ республикабыҙҙың, илебеҙ Рәсәйҙең генә түгел, донъя сәхнәләрен яулай - был ғорурлыҡ түгелме ни! Фәимәбеҙ өс тапҡыр Махсус хәрби операция барған ергә гуманитар йөк оҙатып барып ҡайтты, уның Клара, Алһыу, Фәғилә туғандары шулай уҡ Өфөлә йәшәй. Алһыу контракт буйынса Махсус хәрби операция барған ерҙә хәрби медик булып хеҙмәт итә - шул ғорурлыҡ түгелме ни! Ошондай уҡ һүҙҙәрҙе һәр беребеҙ хаҡында ла әйтергә булыр ине.

Тағы ла шуныһы: беҙ үҙ баһабыҙҙы төшөрмәйбеҙ, маркабыҙҙы юғалтмайбыҙ. Нимә генә тимә, беҙ мәшһүр олатайыбыҙ, ҡартатайыбыҙ, атаҡлы сәсәнебеҙ Буранбай Ҡотосовтоң вариҫтары. Шуға күрә лә беҙ, Өфө Буранбайҙары, башҡа төрлө була алмайбыҙ!

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**5 сентябрь "Бөйрәкәй"** (Т. Ғарипова). 16+
**6 сентябрь "Килен"** (З. Мусина, З. Бураҡаева инсц.). 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**1 сентябрь "Я считаю до пяти"** (М. Бартенев), әкиәт. 12.00 0+
**5 сентябрь "Пеппи Длинныйчулок"** (А. Линдгрен), әкиәт. 11.00 0+
**7 сентябрь "Сказание о семи батырах"** (Д. Йосопов), фэнтези. 12.00 6+

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**1 сентябрь "Гуси-лебеди"** (А. Чалухиди). 14.00 0+
**"Аленький цветочек"** (С. Чураева). 12.00, 15.00 6+
**6 сентябрь "Два кота"** (О. Штырляева). 18.00 0+
**8 сентябрь "Три поросенка"** (Д. Гараева). 12.00, 15.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**1 сентябрь "Йырла, бейе, студент!"** Совет майҙанында концерт. 18.00 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**3, 5 сентябрь "Кошкин дом"** (С. Маршак), әкиәт. 12.00 0+

### БР Милли музейы

**1 сентябрь "Музейҙа Белем көнө"** акция. 6+
**7 сентябрь "Изге эштәр эшләү - еңел?"** автор экскурсияһы. 12.00 16+
**"Элмәле сигеү"** оҫталыҡ дәресе. 12.00 6+
**"Йәш археолог курсы: яңы миҙгел"** сара. 15.00 6+
Рәсәй анимацияһына һәм "Союзмультфильм" киностудияһына арналған күргәҙмә. 0+
**"Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы"** күргәҙмә. 6+
**"Генерал Шайморатов"** күргәҙмә. 6+
**"Өфөнөң фотояҙмаһы"** А.М. Виноградов күргәҙмәһе. 6+

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ИЗГЕЛЕК ҺӘМ ГҮЗӘЛЛЕК ТУРАҺЫНДА ХАТТАР

### Һигеҙенсе хат: "Көләс булырға, әммә көлкөлө түгел"

Йөкмәтке форманы билдәләй, тиҙәр. Был дөрөҫ, әммә ҡапма-ҡаршы фекер ҙә хаҡты әйтә: йөкмәтке лә форманан тора. Быуат башының билдәле Америка психологы Д. Джеймс былай тип яҙа: "Беҙ күңелһеҙлеккә тарыған өсөн илайбыҙ, ләкин илаған өсөн дә күңелһеҙләнәбеҙ". Шуға үҙ-үҙебеҙҙе нисек тотоуыбыҙ, нимә ғәҙәтебеҙгә инергә һәм нимә эске йөкмәткебеҙгә әүерелергә тейеш булыуы хаҡында һөйләшеп алайыҡ әле.

Ҡасандыр бәхетһеҙлеккә тарыуыңды, башыңа ҡайғы төшөүен башҡаларға күрһәтеү килешмәгән. Кеше үҙенең күңел төшөнкөлөгөн башҡаларға көсләп тағырға тейеш түгел, тип иҫәпләнгән. Ҡайғы килгәндә лә бәҫенде төшөрмәҫкә, барыһы менән дә элеккесә аралашырға, үҙ-үҙеңә бикләнмәҫкә һәм мөмкин тиклем асыҡ йөҙлө, хатта күтәренке кәйефтә ҡалырға кәрәк булған. Абруйыңды һаҡлай белеү, көйөнөстәрең менән бүтәндәрҙе борсомау, кешеләр менән аралашҡанда һәр саҡ бер көйө булыу, уларҙың күңелдәрен ҡырмау, асыҡ йөҙлө һәм шат булыу - йәмғиәттә йәшәргә һәм йәмғиәттең үҙенә йәшәргә ярҙам иткән оло һәм ысын сәнғәт ул.

Әммә ҡайһылайыраҡ көләс булырға? Шау-шыулы һәм бәйләнсек көләслек тирә-йүндәгеләрҙе ялҡыта. Һәр ваҡыт үткер һүҙҙәр яуҙырып торған йәш кеше үҙен лайыҡлы тотоусы булараҡ ҡабул ителмәй башлай. Ул кәмитсегә әүерелә. Ә был йәмғиәттә кеше тарый алған иң насар хәлдәрҙең береһе, һәм был, ахыр сиктә, юморҙы юғалтыуҙы аңлата.

**Дмитрий ЛИХАЧЕВ.**



КОМАНДА **ПРОФЕССИОНАЛЛЕК** ҮҪЕШТЕ ТӘЬМИН ИТЕҮ **УҢАЙЛЫ МӨХИТ**

**ОҘАҠ** БУЛЫШЛЫҠ ИТЕҮ **НЫҒЫТЫРҒА** ТӨП ҠИММӘТ – КЕШЕЛӘР

**ДУҪТАРСА** **ӨЙҘӘ** РЕСПУБЛИКА МӘНФӘҒӘТЕНДӘ ЭШЛӘЙБЕҘ

ЕДИНАЯ РОССИЯ

# БАШҠОРТОСТАН – МИНЕҢ ТОРМОШОМ!



**ТЫУҒАН ИЛ** **ҠАРАШЫБЫҘҘЫ БЕЛДЕРӘБЕҘ**

ЯҠШЫРТЫРҒА **ЭШЛӘЙБЕҘ!**

БЕҘ ҺЕҘҘЕҢ МЕНӘН БЕРГӘ, СӨНКИ МИН ЯУАПЛЫЛЫҠТЫ УРТАҠЛАШАМ

**АЛҒА!** **КЕШЕЛӘР ТУРАҺЫНДА ХӘСТӘРЛЕК КҮРЕРГӘ**

**СӘСКӘ АТЫУ** ЭШЛӘЙ БЕЛӘБЕҘ

**ТӨБӘКТЕҢ ҮҪЕШ НӨКТӘЛӘРЕН БИЛДӘЛӘЙБЕҘ**

**ХӘЛ ИТЕРГӘ**

**ҒӘҘЕЛ** ЙӘМҒИӘТЕБЕҘҘЕ БЕРЛӘШТЕРЕРГӘ

**УҢАЙЛЫ** **ЕГЕТТӘРЕБЕҘГӘ ЯРҘАМ ИТЕРГӘ**

**РУХ** **ИҢГӘ-ИҢ ТЕРӘЛЕП АЛҒА БАРЫРҒА**

ҺАҠЛАРҒА **ИҒТИБАР БҮЛӘБЕҘ**

КЕШЕЛӘРҘЕҢ ЫШАНЫС БЕЛДЕРЕҮЕ **БЕРГӘ**

**НЫҠЫШМАЛЫЛЫҠ** **ФАЙҘАЛЫ БУЛЫРҒА**

ЛАЙЫҠЛЫ ТОРМОШ СИФАТЫ ЙҮНӘЛЕШ БИЛДӘЛӘНДЕ

**ТОРМОШ ӨСӨН ИҢ ЯҠШЫ ТӨБӘК**

**КЕШЕЛӘР ӨСӨН ҺӘМ КЕШЕЛӘР МӘНФӘҒӘТЕНДӘ**

ТРАДИЦИОН ҠИММӘТТӘР

ӘҢГӘМӘ **ТӘРТИП**

РАДИЙ ХӘБИРОВ

ҺӨҘӨМТӘЛӘРГӘ ӨЛГӘШӘБЕҘ

**КӨРӘШКӘ САҠЫРЫУҘАРҘЫ ҠАРШЫЛАРБЫҘ**

**БАРЫҺЫ ЛА ЙӘШӘРГӘ ТЕЛӘГӘН РЕСПУБЛИКА**

*Площадь для публикации агитационных материалов кандидата Хабирова Радия Фаритовича предоставлена бесплатно в соответствии со ст. 65 Кодекса Республики Башкортостан «О выборах».*




***Уважаемые избиратели!***

Я призываю Вас голосовать за кандидатов нашей партии – ***6,7,8 сентября 2024 года***, на выборах всех уровней, которые пройдут в нашей Республике.
Республика Башкортостан, обладает всеми необходимыми ресурсами, чтобы обеспечить достойную, долгую и здоровую жизнь, свободное и гармоничное развитие личности для каждого нашего гражданина.

Для этого партия ставит своей целью строить социальное общество, которое существует для человека и во имя его интересов. В том числе сохранение и развитие национальной культуры Республики, наряду с многонациональной культурой страны, как залога безопасности нашего государства, источника гармоничного и творческого развития человека. ***В программе партии «СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ – ПАТРИОТЫ – ЗА ПРАВДУ» четко обозначены приоритетные цели:***

- борьба с бедностью;
- снижение пенсионного возраста до прежнего уровня (женщины 55 лет, мужчины 60 лет);
- повышения размера пенсии, заработной платы;
- улучшение демографической ситуации;
- качественная и доступная медицина;
- качественное и доступное образование;
- снижение максимально допустимой доли расходов граждан на услуги ЖКХ

И многое другое, что касается достойной жизни граждан нашей страны, значит и Республики.

***Голосуйте за кандидатов от партии «СПРАВЕДЛИВАЯ РОССИЯ – ПАТРИОТЫ – ЗА ПРАВДУ» 6,7,8 сентября, на выборах всех уровней, которые пройдут в нашей Республике!***

***Кандидат на должность
Главы Республики Башкортостан*** ***В. Нагорный***

*Площадь для публикации агитационных материалов кандидата Нагорного Владимира Александровича предоставлена бесплатно в соответствии со ст. 65 Кодекса Республики Башкортостан «О выборах».*

✔ *"Урал батыр" эпосына бағышланған аллея булдырыу тураһында ҡасандыр һүҙ алып барҙыҡ та, шунан ары китмәнек. Шулай уҡ "Төньяҡ амурҙары" аллеяһын ойоштороу идеяһы күтәрелде лә, тағы онотолдо.*



БАШ ҠАЛАМ

# МИЛЛИ АЛЛЕЯЛАР КӘРӘК...

**Миллионлы ҡалала ял һәм мәҙәниәт парктары ишәйеп китһә лә, улар тотош халыҡтың ихтыяжын ҡәнәғәтләндерерлек өсөн бик аҙ, тиергә мөмкин. "Урал батыр"ға, "Төньяҡ амурҙары"на арнап, милли аллеялар кәрәк, тигәндә башҡорт йәмғиәтселеге күптән күтәрә.**



Мәсәлән, халҡыбыҙҙың исемдәрен мәңгеләштерергә мөмкин булған тарихи шәхестәре, айырым даталар һәм башҡа ваҡиғалар бик күп. Әммә бер "ләкин" бар - баҙнатһыҙлыҡмы ул, әллә йомшаҡлыҡмы, әллә эҙмә-эҙлекле тең юҡлығымы, тик күп осраҡта даулап һүҙ башлайбыҙ за, эште аҙағынаса алып барып еткермәйбеҙ. Әйтәйек, "Урал батыр" эпосына бағышланған аллея булдырыу тураһында ҡасандыр һүҙ алып барҙыҡ та, шунан ары китмәнек. Шулай уҡ 1812 йылғы Ватан һуғышында ҡатнашҡан башҡорт полктарына бағышлап, "Төньяҡ амурҙары" аллеяһын ойоштороу идеяһы күтәрелде лә, тағы онотолдо. Эйе, мәшәҡәтле һәм сығымлы проекттар буласаҡ улар, әммә туризмды үҫтерәбеҙ тип хыялланабыҙ икән, иҫәп нөктәһенән Өфөнән башланыуы насармы ни? Аҙ ғына хыялды эшкә егеп, мәҫәлән, шул уҡ Шүлгәнташ мәмерйәһенә туристик маршрутты баш ҡалабыҙ "Урал батыр" аллеяһынан башлау хилафмы? Матур тәбиғәт ҡосағында ҡунаҡтарҙы эпостың персонаждары ҡаршы алһа, күлендә аҡкоштар йөҙһә, өс - башҡорт, рус, инглиз телдәрендә эпостан өҙөктәр яҙылған стелалар ҡаршы алһа, артабан, бәлки, Башҡорт академия драма театрында "Урал батыр" спектаклен тамаша ҡылып, шунан ғына Шүлгәнташ мәмерйәһенә юл тотҡанда, донъяның теләһә ҡайһы төбәгенән килгән туристар ҙа мәмерйәне тәбиғи һәйкәл, тәбиғи ҡомартҡы итеп кенә түгел, башҡорттар кеүек уҡ, Кешелектең сығанағы тип ҡабул итер ине.

Йә булмаһа, "Төньяҡ амурҙары" аллеяһында башҡорт полктарының ҡаһарманлығын һүрәтләүсе асыҡ күк аҫтындағы музей йәиһә диорама эшләп, шулай уҡ туристарҙы Башҡорт дәүләт опера һәм балет театрына "Төньяҡ амурҙары" балетына (әйткәндәй, "Урал батыр" һәм "Төньяҡ амурҙары" балеттары ҡасандыр ошо театрҙа ла ҡуйыла. Тимәк, уны тергеҙеү ихтыяжы бар һәм был бик кәрәк тә. Бер яҡтан, туристар милли мәҙәниәт менән дә яҡыныраҡ таныша, икенсе яҡтан, театрҙың милли "йөҙө" барлыҡҡа килә) алып барыу - маршруттың төп өлөшөн тәшкил итер ине.

Әлбиттә, кемдер был яҙмаларҙы хыял тип кенә ҡабул итер. Әммә, мәғлүм булыуынса, һәр нәмә лә был тормошта ике тапҡыр барлыҡҡа килә: тәүҙә - хыялда, икенсеһендә - ысынбарлыҡта...

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

МӘҘӘНИ МАЙҘАН

# АЛЬЫУ, ПОЛИНА, БАСКОВ...

**Өфө ҡалҡыуынан 450 йыллығына арналған байрам саралары 30-31 августа үтәсәк. Баш ҡала округы хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, барлыҡ саралар патриотик тәрбиәгә һәм тарихи дөрөҫлөктө һүрәтләүгә йүнәлтелгән.**

• **30 августа** көндөҙгө сәғәт 3-тән "Арт-Квадрат"та **"АйДа Фест"** урам театрҙары фестивале асыла. Өс көн дауамында барасаҡ фестиваль сиктәрендә баш ҡаланың ете районында 40-тан ашыу тамаша күрһәтеләсәк. Ленин районындағы "Арт-Квадрат" ҡала үҙәге фестиваль үткәрелгән төп майҙан буласаҡ. Ә **31 августа** сәғәт көндөҙгө 12-лә карнавал тантаналы йөрөшө ойоштороласаҡ: ул В.И. Ленин исемендәге майҙандан башланасаҡ. Был фестивалдә Санкт-Петербург, Севастополь, Пермь, Мәскәү, Ҡаҙан, Йошкар-Ола, Әлмәт, Силәбе һәм Өфө ҡалаларынан урам театрҙары ҡатнаша. Сараның хедлайнеры - "Микос" Мәскәү театры 1 сентябрҙә кискеһен сығыш яһай.

• Шулай уҡ **30 августа** Рус драма театры бинаһы эргәһендәге сәхнәлә киске концерт сәғәт 6-ла башлана, был көндә **"Өфө яңғырай!"** Бөтә Рәсәй фестивале сиктәрендә тынлы уйын ҡоралдары оркестрҙары патриотик әҫәрҙәр менән сығыш яһай.

• Бынан тыш, ошо уҡ **30 август** көнөндә киске сәғәт 7-лә "Торатау" конгресс-холлының амфитеатрында **"Евразия йөрәге"** фестивале асыла. Төрлө көндә урындағы артистар, Pizza һәм "Харизма" (Беларусь) төркөмдәре, Ваня Дмитриенко һәм Алексей Воробьев сығыш яһаясаҡ. 31 августа тамашасыларҙы Элвин Грей, Zainetdin этно-проекты, йырсы Алһыу, HammAli & Navai көтә. Фестиваль Башҡортостандың халыҡ артисы Николай Басков сығышы менән тамамланасаҡ.

• **31 августа** көндөҙгө сәғәт 12-лә "Өфө - хеҙмәт ҡаһарманлығы ҡалаһы" стелаһы эргәһендә киләсәк быуындарға **"Ваҡыт капсулаһы"н** һалып ҡалдырыу тантанаһы уҙасаҡ.

• Ошо уҡ ваҡытта Рус драма театры ҡаршыһындағы майҙанда **"Өфө моңгелек"** ҡала фестивале башлана: бында ҡаланың һәр районынан сығышсылар ҡатнашасаҡ. Ә кискеһен **"Өфөнө данлап"** тип аталған концертты махсус конкурс ярҙамында һайлап алынған йыр менән асалар. Был йырҙы "Мираҫ" ансамбле хоры һәм Ҡала мәҙәниәт һарайының "Притяжение" йыр театры солистары башҡара. Өфөгә дан йырлаған ҙур концертта Милли гвардия оркестры һәм йырсылары, Екатерина Гусева, Дмитрий Харатьян һәм Олег Газманов ҡатнашасаҡ.

• Райондарҙағы саралар "Дим", "Беренсе май" һәм "Түлҡын" парктарында көндөҙгө сәғәт 12-нән киске 5-кә тиклем ойоштороласаҡ. Әйткәндәй, "Моторҙар эшләүсе" мәҙәниәт һарайы алдындағы майҙанда билдәле Рәсәй йырсыһы Полина Гагарина сығыш яһаясаҡ. Йырсы үҙенең гонорарының бер өлөшөн Махсус хәрби операцияла ҡатнашыусыларға ярҙамға йүнәлтергә теләк белдерҙе, уның был башланғысын күп кенә ҡатнашыусылар күтәрмәләне.

• Әйткәндәй, юбилей сараларына бәйле автотранспорт хәрәкәтенә сикләүҙәр индереләсәк. Сикләүҙәр осоронда йәмәғәт транспорты маршруттары ла үҙгәрәсәк. Шулай уҡ сиктәш ихаталарҙан сығыу юлдары ла ябылыуы ихтимал.

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТӨКӨРМӘ АШЫҢА:

## ут сығыр ҡашыңа

Ике баланы бергә иҫәплә, бер баланы юҡҡа иҫәплә.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Алланан тормошондо еңелерәк итеүҙе һорама, Ул һине көслө булырға өйрәтһен - шуны һора.

**(Һинд халыҡ мәҡәле).**

Балағыҙҙағы шаянлыҡты баҫһағыҙ, унан аҡыл эйәһе лә яһай алмаясаҡһығыҙ.

**(Жан-Жак Руссо).**

Бер ниндәй яңы нәмә лә юҡ, һеҙ уларҙың күбеһен онотҡанһығыҙ ғына.

**(Мария Антуанетта).**

Артыңа боролоп бер ҡарау етә: бәхет һинең артыңдан эйәреп йөрөгән бер күләгә икәнен күрерһең.

**(Фелипе Виллаеспеса).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Бер ир ҡатыны һәм балалары менән сүлләк буйлап сәйәхәткә сыға. Улар бик оҙон юл үтә, һыу запастары бөтөп, сарсай башлайҙар. Бына уларҙың юлында ярым емерек бер өй пәйҙә була. Өй алдында ҡоҙоҡ барлығын шәйләп, бик шатлана ир кеше. Ҡоҙоҡтан һыу алырға эйелһә, күңеленә "Был һыу ағыулы" тигән уй килә. Әммә ир яҡындарын һыуҙан мәхрүм итә алмауын да аңлай, шуға ла күңел һиҙемләүен инҡар итеп, ҡоҙоҡтан һыу алып, ҡатынына һәм балаларына эсерә. Үҙе өсөн һыу алырға ҡоҙоҡҡа эйелгәндә иһә ғаилә ағзаларының ағыуланып, үлем менән көрәшкәнен шәйләп ҡала. Шунда ир кеше тубыҡланып, Хоҙайға үтенә башлай: "Йә Хоҙай, һинең иҫкәртеүеңде инҡар иткән өсөн гәфү ит мине, ҡотҡар ғаиләмде, зинһар..."**

**Хоҙай уға шулай тип яуап бирә: "Мин һинең ҡатыныңды һәм балаларыңды ҡотҡара алам. Ләкин һин тәүҙә был хәлдән дөрөҫ һығымта яһарға тейешһең. Әгәр ҙә һин минең, кеше ҡылыҡтарының иң яулап булмай торған сиге нимә, тигән һорауыма дөрөҫ яуап бирһәң, мин һинең яҡындарыңды ҡотҡарасаҡмын".**

**Яуабым яңылыш булып ҡуймаһын тип бик оҙаҡ уйлай кеше. Шунан ошолай тип яуап бирә: "Кеше бөтә ғүмере буйы тирәяғында әллә күпме кешеләрҙең үлемен күрә, әммә уларҙың хаталарынан һабаҡ алмай һәм үҙен мәңге йәшәйәсәк кеше һымаҡ тота - бына кеше ҡылығының иң яулап булмай торған сиге..."**

**Хоҙай бер ни ҙә әйтмәйенсә, ирҙең ҡатынын һәм балаларын терелтә. Ирҙең яуабы дөрөҫ була..."**

"Киске Өфө" гәзитен ойоштороусы:
Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.
1 582218 911006 24034

Баш мөхәррир:
Гөлфиә Гәрәй ҡыҙы ЯНБАЕВА.
Мөхәрририәт:
Сәриә ҒАРИПОВА,
Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1
Беҙҙең сайт: www.kiskeufa.ru
E-mail: kiskeufa@mail.ru
ЯСЙ "СПУТНИК-ЮГ" типографияһында баҫылды. Тел.: 8 (967) 744-77-33. (453400, БР, Дәүләкән ҡалаһы, Мәжит Ғафури ур., 4 й., 203 офис).

Телефондар:
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99
Матбуғат таратыу 252-39-99

Ҡул ҡуйыу ваҡыты -
29 август 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 14 сәғәт 30 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44 телефоны буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – ПР905
Тиражы - 2750
Заказ - 1476